*"Сәләмәтлек Алла бүләге, әммә ул һәр саҡта ла файҙалы түгел. Ә бына сирҙең файҙалы яҡтары күп: ул беҙҙе төрлө йән ғазаптарынан ҡотҡара, гонаһтар өсөн үкенергә, тәүбәгә килергә, күңелебеҙҙе йомшартырға ярҙам итә, Хоҙайҙы иҫкә төшөрә..."*

***Серафим Саровский.***


# Киске Өфө

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

31 МАРТ - 6 АПРЕЛЬ (БУРАНАЙ - АЛАҒАРАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№13 (483)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Интернет донъяһына...**

рухиәт орлоғо ташлайыҡсы



5

**Был тарихта...**

завод-фабрикалар тарихы ғына түгел



7

**Килешмәҫкә килдем...**

һинә, донъя!



8-9

**Мәғлүмәтлеләр...**

донъя менән хакимлыҡ итә



12-13

14 ТВ-программа


*БЕҘҘЕҢ ЗАМАН ГЕРОЙЫ*

# БАШҠОРТ БАТЫРЫ...

## донъя кимәлен яулай



**Спорт донъяһында уңыштар, үрҙәр, еңеүҙәр яулағандар сафында милләттәштәрҙең исемен ишетеү, әлбиттә, һәр башҡорт йөрәгендә ғорурлыҡ тойғолары уята. Әле күптән түгел Бөйөк Британия составындағы Шотландияла Абердин ҡалаһында үткән бокс буйынса Европа чемпионатында тағы бер милләттәшебеҙ - быйыл ғына Европа чемпионы (EBU) титулын яулаған Силәбе өлкәһе Мейәс ҡалаһы егете Денис ШАФИҠОВ, дәғүәсеһе Ли Макаллистерҙы 7-се раундта нокаут менән еңеп, 1-се ярым урта ауырлыҡ категорияһында үҙенең Европалағы иң көслө боксер булыуын раҫланы. Әйткәндәй, боксерҙың күптәребеҙҙең иғтибарын йәлеп итерлек тағы бер үҙенсәлеген - рингҡа башҡорт милли кейеме елән һәм ҡамсат бүрек кейеп сығыуын да билдәләргә кирәк. Ошо көндәрҙә Мейәскә шылтыратып, чемпион менән аҙ ғына аралашып алдыҡ. Бөтә башҡа һорауҙарҙы уның менән киләсәктә осрашыуға тиклем ҡалдырып, рингтағы беҙҙең күңелдәргә яҡын образы тураһындағы һорауҙы ғына төбәнек.**

- Ниндәй генә билдәле боксерҙы алма, уларҙың үҙ имиджы, икенсе төрлө әйткәндә, рингтағы образы була, - тип һөйләп китте Денис. - Финдар менән контракт төҙөгән саҡта, азиаттарға хас йөҙөмә ҡарап, улар миңә "Сыңғыҙхан" тигән псевдонимда сығыш яһарға тәҡдим иткәйне. Мин риза булдым, әммә үҙебеҙҙең башҡорт милли кейемендә йөрөйәсәгем тураһында ла белдерҙем. Финдар был тәҡдимде ыңғай ҡабул итте. Әйткәндәй, шулай уҡ башҡорт милли кейемендә сығыш яһаусы тағы бер башҡорт яҡташым - әлеге мәлдә Лос-Анджелес ҡалаһында йәшәүсе боксер, Арғаяшта тыуып үҫкән Хәбир Сөләймәнов менән бәйләнеш тотабыҙ, быйыл йәй айында Силәбелә танышҡайныҡ. Миңә күптәр: "Ни өсөн Сыңғыҙхан? Ул башҡорт түгел бит, ә ниңә Салауат Юлаев исеме аҫтында сығыш яһамайһың?" тиҙәр. Мин былай тип яуап ҡайтарам: "Салауат Юлаев - азатлыҡ хәрәкәте юлбашсыһы, ә Сыңғыҙхан - баҫып, яулап алыусы булараҡ танылған. Унда агрессия көслөрәк. Миңә лә барлыҡ титулдарымды ҡара тир менән яулап алырға тура килгәнлектән, ошо образ ҡулайыраҡтыр, тип уйлайым". Шулай ҙа батыр рухы ярҙам итәме миңә? Был турала анығ ҡына әйтә алмайым, әммә уңыштарға оҙайлы һәм көсөргәнешле күнекмәләр ярҙамында ғына өлгәшергә мөмкин икәнен күптән асыҡлағанмын үҙемә. Был турала тренерым - Николай Валуевты тәрбиәләгән Александр Васильевич Зимин да йыш ҡабатлай. Бының һөҙөмтәләрен үҙем дә күреп һәм күрһәтеп торам...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Башҡорт милләте тураһында донъяла күберәк белһендәр ине", тигән фекерҙә йәш боксер. Бокс рингына, үҙе әйтмешләй, яулап алыусы булып "баҫып ингән" Денис Шафиҡов башҡорт батыры образында үҙен бөтә донъяға танытасаҡ әле, сөнки ул тырышлыҡтың һөҙөмтәһен татырға өлгөргән инде. Уңыштар юлла йыҡ уға!**

**Иҙел РӘХИМОВ яҙып алды.**

*"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ!*

# ҺӘР САҠ КӘРӘКЛЕ БУЛ!

**Бөгөнгө заман кешеһенә мәғлүмәтле булыу мотлаҡ, шул саҡта ғына ул төрлө ваҡиғаларға бай, ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс тормоштоң уртаһында ҡайнап йәшәйәсәк. Мәғлүмәт сығанаҡтары күп, әлбиттә, тик тирә-яҡтағы хәл-ваҡиғаларҙы уҡыусыға аңлайышлы һәм дөрөҫ итеп, юғары профессиональ кимәлдә еткергәндәре бармаҡ менән һанарлыҡ.**

Ундайҙар рәтенә мин "Киске Өфө"нө индерәм. Гәзит бөгөнгө көн ваҡиғаларына объектив баһа биреүе һәм киләсәккә оптимистик күҙлектән сығып ҡарай белеүе менән күңелгә яҡын. Уның һәр һанын көтөп алам һәм ентекләп уҡып сығам, сөнки гәзит биттәрендәге һәр бер мәҡәлә үҙенә тәрән фекер һәм аҡыл һыйҙыра. Тағы ла "Киске Өфө" тарихҡа ҙур иғтибар биреүе, милләтебеҙҙең үткәнен һәм бөгөнгөһөн асыҡ һәм аныҡ фактар аша сағылдырыуы менән дә күп матбуғат баҫмаларынан айырылып тора. Шулай уҡ фәһемле һәм ҡыҙыҡлы кәңәштәр, мәҡәләләр, кәңәштәр менән бер рәттән, донъяуи хәлдәрҙең дә яҡтыртылыуы гәзиттә тағы ла уҡымлыраҡ итә, тип уйлайым.

"Киске Өфө"нөң үҙенә генә хас, төрлө буыун кешеләренә лә аңлайышлы, башҡа бер мәғлүмәт сараһыныҡына ла оҡшамаған үҙ теле һәм стиле бар. Гәзиттең тағы ла бер мөһим үҙенсәлеге - ул Өфөнөң, республиканың актуаль, киҫкен мәсьәләләренә күҙ йомоп ҡарамай, урап үтергә тырышмай һәм көнүҙәк проблемаларҙы күтәреп сығыуы менән бер рәттән, уларҙы хәл итеү юлдарын да тәҡдим итә. Шулай уҡ янынан-яңы ҡыҙыҡлы рубрикаларҙың барлыҡҡа килеүе лә коллективтың туктауһыҙ эҙләнеүе хаҡында һөйләй.

Ғөмүмән, "Киске Өфө" йәнле һәм ихлас, заманы менән бергә атлаусы баҫма. Уға артабан да үҙ уҡыусыһына ҡыҙыҡлы һәм кәрәкле булып ҡалыуын теләйем.

**Гөлназ ӘМИНЕВА,**
**Ҡ. Дәүләткилдеев исемендәге Республика художество гимназия-интернатының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# БӘЙГЕГӘ САҠЫРАБЫҘ!

Интернет донъяны яулай икәнен беләһегеҙ. Шулай икән, йәғни балаларыбыҙҙы һәм йәштәребеҙҙе интернет менән мауығыуҙарҙан айырып алыу мөмкин түгел икән, тимәк, был мәғлүмәт яланында рухлы, аҡыллы һүҙ ҙә урын алырға тейеш. Гәзитебеҙҙең был һанында 12-13-сө биттәрҙә ошо темаға фекер алышабыҙ. Интернетта "Шоңҡар" журналының "Минең Рәми" проектына эйәреп, "Киске Өфө" гәзитенән бәйгеһен иглан итеүебеҙ тураһында 5-се биттә уҡығыҙ һәм бәйгегә ҡушылығыҙ, мөхтәрәм йәмәғәт!



✓ *Ҡала округы хакимиәтенә генә түгел, ә өфөләләрҙең үҙҙәренә лә тырышырға кәрәк. Һәр кем тотош ҡаланы үҙенең өйө кеүек тойоп, таҙалыҡта тотһа, Өфөбөҙ тағы ла сағыуыраҡ төҫтәр менән балҡыр.*



БАШ ЙОРТТА...



# ТОТОШ ҠАЛАНЫ...

## үҙ өйөндәй той!

**Крансы һөнәрен үҙләштереп, Стәрлетамаҡ ҡалаһында бер аҙ тәжрибә туплағас, 1967 йылда Өфөгә эшкә килдем һәм утыҙ йылдан ашыу баш ҡалабыҙҙың үҙгәреүен, үҫеүен, матурланыуын ҡоштар бейеклегенән күҙәттем. Сауҙа үҙәге, күп ҡатлы йорттар, дауаханалар, бала табыу йорттары, төрлө заводтар төҙөүҙә ҡатнаштым.**

Баш ҡалаға килгәс, беренсе төҙөгән йорт әле булһа иҫтә - ул Октябрь проспектында ине. Шул йортто төҙөгән саҡта юлдарҙың киң булыуын күреп: "Ярты сәғәткә бер-нисә генә машина үтә, ә ниңә юлды шул тиклем киң итеп төҙөйҙәр икән?" - тип аптырай инем. Ләкин йылдар үтеү менән ул саҡтағы киң юлдар бөгөнгө автомобилдәр тулҡыны өсөн бик бәләкәй генә булып ҡалды. Урамдағы тығындарҙы, торлаҡ йорттар алдында торған машиналарҙы күреп иҫтәр китә. Ҡайһы саҡта бер кешегә ике машина тура килгән кеүек тойола башлай. Шуға күрә, күпләп автомобиль ҡуйыу урындары - парковкалар - төҙөү ҡала округы хакимиәте алдында торған тәүбурыстарҙың береһе, тип иҫәпләйем. Шулай уҡ был темаға ҡағылған тағы бер мөһим мәсьәлә - ул автомобиль йөрөтөүселәрҙең күбеһененң йәйәүлеләрҙе хөрмәт итмәүе. Йорттар араһында ла, йәйәүлеләр өсөн генә тәғәйенләнгән тротуарҙарҙа ла күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәй елдерә бит хәҙер улар. Был башбаштаҡлыҡҡа юл ҡуймаҫ өсөн дә ниндәйҙер сара уйлап табыу мөһим.

Төҙөүсе булараҡ, бөгөнгө көндәге төҙөлөш объекттарына ла йыш күҙ һалам. Заманында "хрущевка" тип аталған биш подъезлы биш ҡатлы йортто төҙөү өсөн беҙгә 25 көн ваҡыт бирелә ине. Өйҙө шул ваҡытҡа тапшырыу өсөн өсәр сменалап, алһыҙ-ялһыҙ эшләнек. Ләкин ваҡыттың әҙ булыуы төҙөлгән йорт сифатына тәьҫир итмәне. Ә хәҙер нисек? Фатир һатып алыусы, беренсенән, йорт төҙөлөп бөтөүен оҙаҡ ваҡыт көтөргә мәжбүр, икенсенән, күсенгән хәлдә лә уны баштан аяҡ тиерлек яңынан эшләй, сөнки төҙөлөш компаниялары аҡса, клиент артынан ҡыуып, төҙөлөштөң сифатына артыҡ иғтибар итеп бармай, күрәһең. Шуға күрә, бер көн барлыҡҡа килеп, икенсе көн юҡҡа сығыу "һәләтенә" эйә булыусы төҙөлөш ойошмалары власть тарафынан контролдә ныҡ тотолорға тейеш, минеңсә. Ләкин шуны билдәләп үтергә кәрәк: элекке йорттар бер төрлөлөгө, һоролого менән күҙгә бәрелһә, бөгөн иһә һәр бер йорттоң биҙәлешенә, йәғни эстетик яғына, ҙур иғтибар бирелә. Был да, үҙ сиратында, Өфөнөң йөҙөн яҡшы яҡҡа үҙгәртә.

Ғөмүмән, бөгөнгө Өфө матур, төҙөк, яҙҙан алып көҙгә тиклем сәскәгә күмелеп ултыра. Шулай уҡ ағас ултыртыуға, ғөмүмән, ҡаланы йәшелләндереүгә ҙур әһәмиәт бирелә. Ә йәшеллектең күп булыуы, ҡала халҡының һаулығына ыңғай йоғонто яһай, тимәк, ҡала власы өфөләләр тураһында, балаларҙың киләсәге хаҡында уйлай, тип фекер йөрөтөргә мөмкин. Нисек кенә булмаһын, баш ҡала көндән-көн матурая, ҙурая, күркәмләнә бара. Тик эштәр ошо юҫыҡта дауам итһен өсөн ҡала округы хакимиәтенә генә түгел, ә өфөләләрҙең үҙҙәренә лә тырышырға кәрәк. Һәр кем тотош ҡаланы үҙенең өйө кеүек тойоп, таҙалыҡта тотһа, Өфөбөҙ тағы ла сағыуыраҡ төҫтәр менән балҡыр.

**Камила БАЯЗИТОВА,**
**хеҙмәт ветераны.**

ИШАРА

# ҠОЛАП БАРҒАНДЫ...

## этәреп ҡолатабыҙ түгелме?

**Беренсе апрель етә башлаһа, тормошомдағы ҡайһы бер хәтирәләр иҫкә төшә лә... Юҡ, көлмәйем, алдауҙың ҡайһылай насар нәмә икәнен тағы бер тапҡыр мыйыҡ осона урап ҡуям.**

Балалар йортонда тәрбиәләнгәндә булды был хәл. Бер йылдан уҡырға барасаҡбыҙ, тип йөрөгән мәл. Иртәнге сәғәт һигеҙҙә уяттылар, ғәҙәттәгесә, йыуынып, иртәнге сәйгә ултырыштыҡ. Шунда Гөлсөм исемле ҡыҙыҡайыбыҙ тыныс ҡына тауыш менән: "Сара апай, һеҙҙе директорға саҡырҙылар!" - тине. Сара апай, ҡаушап, биттәре ҡыҙарып бүлмәнән сығып китте. Бер аҙ ваҡыт үткәс, Сара апай: " Мин 1 апрель икәнен бөтөнләй онотҡанмын бит. Үәт, бәләкәс кенә алдаҡсы!" - тип йылмайып килеп инде. Миңә нисектер бик ҡыйын булды ул саҡта. Шуға ла бик күп йылдар үтеүенә ҡарамаҫтан, үҙендән оло кеше менән шулай шаярыу йәмһеҙ күренеш икәне онотолмай...

Тағы ла "Мин һине яратам!" тип йөрөгән бер ирҙең "шаяртыуы" иҫемдә ҡалған. Беҙ уның менән бер ойошмала эшләй инек. Бер көндө миңә телеграмма тотторҙолар. Унда "Мәскәү поезында киләм, ҡаршы ал. Маша" тип яҙылған. Мәскәүҙән минең Маша исемле танышым юҡ табаһа, тип аптыраһам да, берәй танышымдың танышылыр ул, тип, тимер юлы вокзалына төштөм. Сәғәт төнгө берҙә килә икән ул поезд. Матбуғат киоскыһынан бер журнал һатып алып, көтөү залында ваҡыт үткәрергә булдым. Ҡайтып китер инем, Маша исемле, миңә бөтөнләй таныш булмаған ханым сит ҡалаға килеп төшөп, яңғыҙы ни эшләр? Уның бөтә өмөтө миндә бит. Бына поезд килер ваҡыт етте. Радио аша поездың ниндәй перронда туҡтауын иғлан иттеләр. Йүгерҙем. Тейешле вагон туҡтаясаҡ урынға барып баҫтым. "Маша үҙе таныр әле мине", тип үҙемде тыныс тотам. Бына вагондың ишектәре асылды һәм ҡаршымда... теге мине яратам тип ҡаңғыртҡан хеҙмәттәшем баҫып тора. Ауыҙы ҡолағынаса йырылған. Вагондан төштө лә: "Мин инде ул Маша! Беренсе апрель менән ҡотлайым!"- тип ауыҙын йыра. Алдаҡсыға әйләнеп тә ҡарамай, ҡайтыу яғына йүнәлдем. Тик бына бәлә - трамвайҙар туҡтаған, автобустар ҙа йөрөмәй. Мин Нижегородка биҫтәһенә ҡайтыусы бер төркөм халыҡҡа эйәреп киттем. Бара торғас, кешеләр берәм-берәм өйҙәренә ҡайтып етте. Мин үҙем генә ары атланым. Нижегородка биҫтәһе ҙур ауыл инде. Урамдарында фонарҙар ҙа янмай, өй тәҙрәләрендә уттар һүнгән. Халыҡ күптән йоҡоға ятҡан. Бер ҡапҡаға тотонғайным, ҙур эт өрә башланы. Абына-абына ул тирәнән китә һалдым. Саҡ ҡына ара үтеүгә, күрше урамда бер төркөм иҫеректәрҙең һүгенеп баҫып тороуын ишетеп, ситкә тайпылып атланым. Ҡайһы тирәлә йөрөүемде белә алмай аҙаштым. Башым бөтөнләй буталды. Аптырағас, туҡтап күккә ҡараным. Йондоҙҙар буйынса йүнәлеш ала белмәүемә үкендем. Күкте байҡап баҫып торһам, бына ҡыуаныс, тау башында, алыҫта телебашняның ҡыҙыл уттары йымылдай. Шул уттарға ҡарап йүнәлеш алдым. Бына шулай аҙашып йөрөп-йөрөп, көскә ҡайтып индем. Мине алдаған ирҙе бүтән бер ҡасан да күрмәҫ өсөн икенсе көн үк ғариза яҙып, эшемдән киттем, хатта адресымде үҙгәрттем...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һиҙәһегеҙҙер, ваҡыт үтеү менән шаяртыуҙар икенсе төҫ ала бара. Шулай, бер мәмерйәлә боронғо кешенең ташҡа абынып ҡолап барыуы төшөрөлгән һүрәтте тапҡандар. Бик боронғо һүрәт, тигән һығымта яһаған ғалимдар. Хәҙер иһә былай ҙа ҡолап барыусыны этәреп ебәреү - заманса юморға әйләнде. Юморыбыҙ, ниңәлер, уҫаллана, тоҙһоҙлана бара шул. Бөтә телеканалдар криминал, боевик, триллерҙар, негатив хәбәрҙәр менән тулды. Былай ҙа йонсоған халыҡты тағы ла хәлһеҙләндереү, ҡолап барғанды этәреп ебәреү тип ҡабул итәм мин быларҙы. Аҡыл тупларлыҡ, фәһем, өмөт алырлыҡ "юморҙар" уйлап табырға ине...**

**Айгөл АХУНОВА.**

ИҒТИБАР!

## МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

Апрелдә 2012 йылдың икенсе яртыһына 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 354 һум 24 тингә яҙылып, **квитанцияһын редакциябыҙға ебәргән өс уҡыусыбыҙ "400 башҡорт халыҡ йыры" китабына эйә буласаҡ.** Бәхетегеҙҙе һынап ҡарағыҙ ҡана!

**МӨХӘРРИРИӘТ.**



Бөрйән районының башҡорт теле уҡытыусылары.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Түбәнге Новгородта Рәсәй Федерацияһы Президентының Волга буйы федераль округындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич рәйеслегендә ауылға ярҙам итеү буйынса федераль һәм төбәк программаларының һөҙөмтәлелеге, Волга буйы федераль округы агросәнәғәт комплексының инвестициялар йәлеп итеү ҡеүәһе кеүек мәсьәләләр буйынса ултырыш үтте. Унда Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов та ҡатнашты һәм сығыш яһаны.

✓Алдағы ялда Башҡортостанда көндәр йылынасаҡ. Рәсәй Гидрометеорология үҙәге мәғлүмәттәренә ярашлы, һауа температураһы 5 градусҡа тиклем күтәреләсәк. Төнөн дә бер аҙ йылытыуы көтөлә - минус 1-2 градус буласаҡ. Шул уҡ ваҡытта аяҙлы-болотло һауа торошо һаҡланасаҡ. Урыны менән яуым-төшөмдәр буласаҡ. Синоптиктар, киләһе аҙнала төбәктә көндәр йылына башлаясаҡ, тип фаразлай.

✓Өфө ҡала Советы депутаттарының һәр береһенең бишәр ярҙамсыһы буласаҡ. Әгәр бығаса һәр депутатҡа уртаса 20 мең һайлаусы менән эшләргә тура килһә, хәҙер уларҙың һаны ике тапҡырға артты. Өфө депутаттары ярҙамсыларының һанын арттырыу ҡала бюджетынан өҫтәмә сығымдарҙы талап итмәйәсәк, сөнки ярҙамсылар, депутаттар кеүек үк, бушлай эшләй. Ҡала Советы башлығы Евгений Семивеличенко хеҙмәттәштәрен ярҙамсылар һайлауға яуаплы ҡарарға саҡырҙы, сөнки тап улар депутаттар исеменән халыҡ менән эшләйәсәк.

✓Өфө ҡала Советының яңы регламенты булдырылды. Ҡала Советы рәйесе Евгений Семивеличенко билдәләүенсә, был документ депутаттар корпусы өсөн бик мөһим. Ул депутаттар, Совет президиумы һәм комиссияларҙың эш тәртибен билдәләй. Иң мөһиме - һайлаусылар менән эшләүгә аныҡлыҡ индерә. Ошо уҡ ултырышта депутаттар ҡала Советының даими комиссиялары хаҡында Положениены раҫланы, ағымдағы йылға ҡала бюджеты тураһындағы ҡарарға үҙгәрештәр индерҙе. Был үҙгәрештәр нигеҙҙә граждандарҙы авария хәлендәге һәм иҫке йорттарҙан күсереү буйынса адреслы республика программаһын тормошҡа ашырыуға бәйле.

✓1 апрель Башҡортостан юлдаш телевидениеһында Балалар көнө тип иғлан ителде. "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалына 20 йыл тулыуҙы шулай билдәләргә булдылар.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Тормошобоҙҙа көлкөгә урын бармы?



***Фәниә СӨЛӘЙМӘНОВА, Башҡортостандың халыҡ артисы, музыка белгесе:*** Тормошта көлкөгә һәр ваҡыт урын бар. Көлкө сәләмәтләндереүсе, сихәтләндереүсе көскә эйә. Көлкө булмаһа, кеше ауырлыҡтарға бик тиҙ бирешер ине, донъяның бер ҡыҙығы ла булмаҫ ине. Һуңғы йылдарҙа иллә мәгәр көлкөлө күренештәр бик күбәйҙе. Үҙебеҙҙең төбәктә генә алайыҡ. Ғүмер буйы сәнғәт, музыка өлкәһендә эшләгән кеше булараҡ, ошо юҫыҡта күҙгә салынған ҡайһы бер күренештәрҙән аптырағандан көләһең. Мәҫәлән, бөгөн беҙҙә халҡыбыҙҙа музыкаль культура тәрбиәләүгә ҡул һелтәнгән. Шуға ла бер көнлөк "көрама" йырҙар күбәйҙе, уларҙың ни һүҙенән, ни үҙенән көлөргә белмәйһең. Беҙҙең халыҡта юмор тойғоһо ифрат көслө бит ул. Үҙебеҙҙән, әйҙә, көлһәк тә, кеше көлдөрөп тә йәшәмәйек, тиеүем, юғиһә, бөгөн сәхнәләребеҙҙән дә яңғырай ул "йоморо" ғына юмор - ҡарап, тыңлап ултырыуы уңайһыҙ, йомшаҡ итеп әйткәндә. Билдән түбән хаяһыҙ шаяртыуҙарҙы мин хатта юмор тип тә әйтмәҫ инем әле. Режиссерҙар нимә ҡарайҙыр... Һәр нәмәлә сама булған кеүек, көлөүҙә лә сама белергә кәрәктер. Һәр хәлдә, мин үҙем эскерһеҙ, саф юморҙы яҡын күрәм. Тормошобоҙҙа ул йышыраҡ кескәйҙәр донъяһында осрап тора. Балаларҙың һөйләшеүенән ихлас күңелдән көләһең, үҙеңде йәшәреп киткәндәй тояһың. Әйткәндәй, юморҙа бит уның эсенә төрөп бирелгән аҡыл ята, шуны аңларға кәрәк, кеше күңелендә башҡа төр зауыҡ тәрбиәләгән кеүек үк, юмор тойғоһон да тәрбиәләү кәрәк кешелә, сөнки уны аңлап етмәгән зәғиф күңелләләр ҙә бар бит арабыҙҙа. Үндайҙар рухи яҡтан фәҡир әҙәмдәр рәтенә инәләр, тип уйлайым. Көлә белеп көлгәндәргә йәшәүе лә күңеллерәк бит ул. Бер ағай һөйләй торғайны: "Ғәйнулла минән көлә, мин уның тешенән көләм",- тип. Шуның кеүек, көләм тиһәң, ҡыҙыҡтар, сәбәптәр күп ул, тик ҡайһы саҡ, кем әйтмешләй, көҙәһенән мәҙәге мөһимерәк: тормоштоң нисек кенә булыуына ҡарамаҫтан, гел турһайып йөрөгәнсе, донъяға йышыраҡ йылмайып баҡыуың мең артыҡ!

***Урал МОСТАФИН, яҙыусы:*** Бөгөнгө тормош-йәшәйешебеҙҙәге хәл-ваҡиғалар көлкөнө яңыртты. Хәҙер көлөргәмә, иларғамы икәнде лә белеп булмай, сөнки, бер ҡараһаң, иларлыҡ, икенсе ҡараһаң, көлөрлөк күренештәр күбәйҙе. Хужа Насретдиндән һорайҙар икән дә, нинә һин улай атына арт яҡҡа әйләнеп ултырып алғанһың, үҙең йылмайып китеп бараһың, тип. "Алда низәр булырын мин белмәйем, ә бөтә яҡшы һәм ҡыҙыҡлы нәмәләр артта тороп ҡалды бит",- тип яуаплаған, ти. Шуның кеүек, беҙҙең дә бөтөн ҡыуаныстарыбыҙ, йыуаныстарыбыҙ үткәнебеҙҙә тороп ҡалды һымаҡ тойолоп китә ҡай саҡ. Ысынлап та, ауыҙ йырып нимәгә ҡыуанырға һуң бөгөн? Сабыйҙарҙы урлайҙар, үсмерҙәр үҙ-үҙҙәренә ҡул һала йә бер-берһен дөмбәсләй, йә аҙып-туҙып йөрөйҙәр... Исмаһам, күңел асылмаҫмы, тип телевидениенан көлкө тапшырыуҙарын асып ҡарайым, тиһәң, унда шау билдән түбән юмор баҫып алған. Илебеҙҙәге хәл-ваҡиғаларға сарказм менән ҡарамағанда, башҡа төр ҡыуаныстар, ихлас күңелдән ҡысҡырып көләргә сәбәптәр юҡ. Көлкө бит ул бәрәкәтле тормоштан ҡәнәғәт йәндең ихлас күңелдән сыҡҡан шатлыҡлы ауаздары. Һәр ваҡыт шик-шөбһәләрҙән ҡурҡып-өркөп, иртәгәһе көнгә ышанысһыҙ йәшәгән кеше нисек ихлас көлөп йәшәһен инде! Ирекһеҙҙән күңелемдә ошондай юлдар тыуҙы:

Көн дә генә булып тормай уйын-көлкө,
Тормош беҙгә һоғондора төрлө һыйын.
Әсеһен дә, сөсөһөн дә күп татыһаң,
Көләү түгел, хатта илаүы ла ҡыйын.
Ҡыҙыҡ-мыҙыҡ хәбәр һөйләп көлдөрөрҙәр,
Ярҙам иткән кеше булып - бөлдөрөрҙәр.
Шүрәленең ҡытығына бирешкәндең
Ен-пәрейҙәр ауыҙына төкөрөрҙәр...

***Һөйөндөк АҪЫЛОВ, журналист:*** Көлкө - тормошобоҙҙоң айырылғыһыҙ бер өлөшө ул. Донъяның төрлө ҡатмарлыҡтары аша үткән саҡта, әгәр кеше юмор тойғоһона эйә булһа, ул ысынбарлыҡты еңелерәк ҡабул итә. Ә инде тормоштоң ҡотолғоһоҙ ысынбарлығын нисек бар - шулай ҡабул итһәң, аҡылыңдан яҙырға мөмкин... Юмор тойғоһо кешеләр менән аралашҡанда ла бик кәрәк, сөнки ул көсөргәнешлекте йомшарта, бер-береңде яҡшыраҡ аңларға ярҙам итә. Ҡайһы саҡ тап ана шул юмор кешене төрлө сетерекле хәлдәрҙән дә ҡотҡара. Үҙем менән булған шундай бер хәлде һөйләйем әле. Бер дуҫтың юбилей кисәһе мәжлесенән сығып, бер-ике аҙым атлауым булды, ике яғымда ике "мент" пәйҙә булды. Машиналарына алып килеп ултырттылар ҙа протокол төҙөргә булды былар. Ҡағыҙҙы тултырып бөткәс, күпме эскәненде яҙып, ҡул ҡуй, тип протоколды минә һуҙалар. Исерек үк булмаһам да, ҡыҙмаса инем. Тоттом да 99,9 грамм тип яҙып, ҡул ҡуйҙым. Былар ҡаранылар ҙа көлөп ебәрҙеләр. Һүҙ артынан һүҙ китте. Юморлы телмәрем оҡшап ҡалды бит егеттәргә. Һәүетемсә һөйләшә-көлөшә торғас, былар мине йәшәгән йортом янына уҡ килтереп төшөрөп киттеләр, уәт!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# БАЛТА ТОТА БЕЛГӘН ҠУЛ...

## эшһеҙ булмаҫ



**Бөгөнгө көндә эшһеҙлектән интегеүселәрҙең күплеген күреп аптырайым. Ауылда йәшәгәс, нәк ауыл халҡын күҙ уңында тотоп һүҙ йөрөтәм, ә ҡала халҡына "теймәйем". Теләк булғанда, ауылда һәйбәт һәм мул донъя көтөргә була, сөнки ҡайҙалыр алтынға бәрәбәр булған уңдырышлы тупраҡлы ер беҙҙә йәйрәп ята. Ниндәйҙер төбәк һыуһыҙ интегә, ә беҙҙә сылтырап аҡҡан шишмә, мул һыулы йылғалар бихисап. Үләне билгә етеп үҫеп ултырған бесәнлек урындары ла етерлек, тимәк, мал-тыуар көтөү ҙә бер ауырлыҡ тыуҙырмай. Шулай уҡ ауыл ерендә ҡул эшенә оҫталарға ла һорау күп. Һанай китһәң, эшлә генә, ә эше булған кеше ас булмай. Әлбиттә, ерҙә тир түгеү йәки ҡул эше еңелдән түгел, ләкин ғаиләһенә, балаларына лайыҡлы тормош булдырырға теләгән ир-егетте был ауырлыҡ ҡурҡытмай, тигән фекерҙәмен.**

Үҙемдең эшмәкәрлегем хаҡында һөйләп киткем килә. Ҡала кешеһе күберәген дәүләт төҙөгән өйҙән үҙенә фатир һатып алһа, ауыл халҡы йортто үҙ көсө менән һалып сыға. Бөгөнгө көндә кирбес, шлакоблоктан төҙөлгән өйҙәр күбәйҙе лә, күптәр барыбер ағастан һалынған йортҡа өҫтөнлөк бирә. Йәнһеҙ кирбестән төҙөлгән өйҙә тынсығып ултырғансы, күкрәк тултырып тын алырлыҡ, урман еҫе сығып торған ағас өйҙә ғүмер кисереүе күпкә артыҡ икәнлеген яҡшы аңлай улар. Бындай кешеләр булғанда, тимәк, ҡулына балта тота белгән, бура бурарлыҡ, ағас эшен аңлаған оҫталар ҙа кәрәк.

Мин нәк ошо ихтыяждан файҙаланам да инде, йәғни бура бурайым. Бура тик ҙур өйҙәр өсөн генә бурала, тип уйларға ярамай, сөнки кемгәлер бура өлөге лә баяғы кирбес өйө янына бәләкәй өй (усаҡлыҡ, йәйге өй - төрлө яҡта төрлөсә әйтәләр) эшләргә, икенсегә мунса өсөн, өсөнсөгә иһә ҡоҙоҡҡа төшөрөргә кәрәк. Әлбиттә, үҙ ауылыңда ғына эшләп, килемле эш табыуы ауыр, шуға күрә республиканың төрлө райондарына сығып эшләйем. Бер сығып китеүҙә, көмендә, 20-25 мең аҡса эшләп алып ҡайтам. Өйҙә күктән төшкәндә көтөп ятҡанға ҡарағанда, был бик һәйбәт килем, тип уйлайым. Мин, мәҫәлән, бер ҡайҙа ла рәсми эшләмәйем, эшһеҙлек буйынса мәшғүллек үҙәгендә иҫәптә тормайым, тимәк, аҡсаһыҙлыҡтан интегергә тейеш булам. Ләкин мин ҡул көсө ярҙамында аҡса табам һәм ғаиләмде ҡарайым.

Тормош ауыр түгел, тик уны ҡатмарлы итергә тырышыусылар ғына күп. Уйлау-фекерләү ҡеүәһенә эйә, ҡулына ниндәй булһа ла эш ҡоралы тота белгән кеше эшһеҙ, тимәк, аҡсаһыҙ ултырмаясаҡ. Бары тик ялҡаулыҡҡа баш бులырға һәм төшөнкөлөккә бирелмәҫкә генә кәрәк.

**Рәил МОРАТОВ. Ауырғазы районы.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓Өфө ҡала округы хакимиәте үҙенең штатын 25 кешегә арттыра. Чиновниктар иҫәбенең артыуы ҡала округы хакимиәте составында ике яңы бүлексә ойошторолоуына бәйләнгән - бында шәхси хәүефһеҙлек һәм мәғлүмәт һаҡлау бүлеге, рәсми һәм протокол саралары секторы барлыҡҡа киләсәк. Шулай уҡ быға булған ике бүлек үҙгәртеп ҡоролаcаҡ. Юридик бүлек - хоҡуҡ идаралығы, ә мәғлүмәт-аналитика бүлеге мәғлүмәт-аналитика идаралығы итеп үҙгәртеләсәк.

✓Өфөнөң Химиктар мәҙәниәт һарайында Орджоникидзе районына 60 йыл тулыуға арналған тантаналы сара үтте. Мәҙәниәт һарайы фойеһында күргәҙмә эшләнә, унда район предприятиелары, шул иҫәптән бәләкәй бизнес субъекттары продукцияһы тәҡдим ителде. Район халҡын был мөһим ваҡиға менән ҡотларға Башҡортостан Президенты Хакимиәте етәксеһе Владимир Балабанов, төбәктең Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев һәм Өфө хакимиәте башлығы Ирек Ялалов килде.

✓Ағымдағы йылдың апреленән алып ай һайын Башҡортостандың баш ҡалаһында йәштәр өсөн вакансиялар йәрминкәләре үткәреләсәк. Беренсе бындай йәрминкә Өфөлә 5 апрелдә үтәсәк. Сараны ҡаланың Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәге ойоштора. Ошо көндәрҙә Өфөлә сәнәғәт предприятиелары өсөн йәнә бер вакансиялар йәрминкәһе үткәрелде. Унда яҡынса 600 кеше ҡатнашты. Йәрминкәлә 22 эш биреүсе 330 буш эш урыны тәҡдим итте. Сәнәғәт өлкәһе белгестәренә генә түгел, менеджер, логист, машина йөрөтөүсе, рәссам, һатыусы, кассир һәм страхокалау агентарына ла һорау ҙур булды.

✓Башҡортостанда сүп-сарҙы айырып йыйыу буйынса эксперимент үткәреләсәк тораҡ пункттар билдәләнгән. Улар Кушнаренкола, Стәрлетамаҡ, Сибай һәм Өфө ҡалаларында урынлашаcаҡ. Сүп-сар ике категорияға - аҙыҡ-түлек ҡалдыҡтарына һәм аҙыҡ-түлеккә ҡарамаған сүп-сарға бүленәсәк. Аҙыҡ-түлек ҡалдыҡтары полигондарҙа күмеләргә, ә аҙыҡ-түлеккә ҡарамаған сүп-сар сорттарға айырылып, ҡайтанан эшкәртелергә тейеш. Сүп-сарҙы айырып йыйыу практикаһын индереү ҡалдыҡтарҙы икенсел матди ресурстар сифатында файҙаланыуҙы арттырырға һәм полигондарҙа урынлаштырылған сүп-сар күләмен кәметергә мөмкинлек бирәсәк.

**"Башинформ"дан.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЙОРТЛО БУЛЫРҺЫҢ

**Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексәһе тарафынан ошо йыл башынан алып әсәлек (ғаилә) капиталына 3660 сертификат тапшырылды. Был программа ғәмәлгә ингәндән алып республикала бөтәһе 125 мең ғаилә әсәлек капиталына сертификат алды, шуның ярҙамында 49 мең ғаилә үҙҙәренең торлаҡ шарттарын яҡшыртты. Бөгөнгө көнгә 22600 ғаилә әсәлек капиталы аҡсаһын тулы күләмдә үҙләштерҙе.**

Торлаҡ кредиттары һәм займдарын түләү әсәлек (ғаилә) капиталын файҙаланыуҙың иң киң таралған йүнәлеше булып ҡала. Ошо йүнәлеш буйынса 35 меңгә яҡын ғаилә торлаҡ кредиттарын тулыһынса йәки өлөшләтә түләгән. Сертификат эйәләренең ғаризалары буйынса БР районлары һәм ҡалаларының РФ Пенсия фонды идаралыҡтары ошо маҡсаттарға 10,9 млрд. һум аҡса күсергән.

Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексәһе идарасыһы Фоат Хантимеров һүҙҙәренә ҡарағанда, әсәлек капиталы аҡсаһын тотоноуҙың төп йүнәлеше буйынса билдәле бер ҡарарға килгән ғаиләләрҙән торлаҡ шарттарын кредит аҡсаһынан тыш яҡшыртыуға бәйле дөйөм суммаһы 4 млрд. һум тәшкил итәсәк 14371 ғариза алынды, балалар уҡытыуға - 691, әсәләрҙең киләсәкке пенсияһы иҫәбенә 14 ғариза килде. Күптән түгел генә ҡабул ителгән закон нигеҙендә, әсәлек капиталы аҡсаһын пенсияһының тупланма өлөшөнә йүнәлткән сертификат эйәләренә был аҡса пенсияға сыҡҡан саҡта ҡайтарып түләнә. Унын оҙайлығын граждандин үҙе билдәләй, ләкин ул 10 йылдан да кәм булырға тейеш түгел. Ғаиләгә бағышланған ошо йылдан алып әсәлек капиталына эйә булыусылар уның аҡсаһын балаларҙы уҡытыуға ғына түгел, ә уларҙы мәғариф учреждениеларында ҡараған өсөн дә күсерә ала. Әсәлек капиталы күләме 387,6 мең һум тәшкил итә.

**Рәсәй Пенсия фондының БР буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

# ЭЛЕКТРОН КИТАП

**З.Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте замана һәм уҡыусы талабына яуап биреү өсөн китап һөйөүселәргә яңы хеҙмәт тәҡдим итә. Нәшриәттең тематик планында уҡыусылар тарафынан киң һорау менән ҡулланылған яңы формат - "Электрон китап" тип аталған бүлек барлыҡҡа килде.**

Тик DjVu форматта ғына тәҡдим ителгән 9 китап үҙ эсенә драма әҫәрҙәрен, тарихи хроникаңы, документаль повестарҙы ала. Ҡағыҙ аналогы булмаған был китаптарҙы нәшриәттең рәсми сайтында www.kitap-ufa.ru һатып алырға мөмкин. Китап өсөн Сбербанк, Qiwi һәм Web Money аша аҡса түләгәндән һуң, клиент нәшриәт сайтында үҙенең персональ бүлегендә китапты һатып алыусыға ебәреү өсөн һылтанма аласаҡ. Нәшриәттең интернет-магазинында тағы ла 86 баҫманы табырға мөмкин. Шулай уҡ 56 автор үҙ әҫәрҙәргә глобаль селтәргә урынлаштырыуға рөхсәт биргән, ә тағы ла 26 баҫма Интернет селтәренә сығарыуға әҙерләнә. Интернет-магазиндағы теге йәки был авторҙың әҫәренә булған ҡыҙыҡһыныуҙар күләме ҡулъяҙманы баҫмаға сығарыуҙы хәл итеүҙә ҙур роль уйнай. Шулай итеп, электрон китап нәшриәттең тематик планын формалаштырыуға ла яңы талаптар ҡуя.

Тиҙҙән шулай уҡ нәшриәт менән Әхмәт-Зәки Вәлиди исемендәге Милли китапхана араһында "Китап"тың электрон китаптарын китапхананың локаль селтәрендә ҡулланыу мөмкинлеге биргән килешеү ҡул ҡуйыласаҡ, йәғни китапханаға килеүсе күсереп алмай ғына башҡорт нәшриәте тәҡдим иткән яңы китаптар менән ҡулланыу мөмкинлегенә эйә буласаҡ.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Йыл дауамында Өфө ҡала округында уҙғарылған "Туғандар" проекты сиктәрендә М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты һәм Өфө ҡала округы хакимиәте хеҙмәттәшлек итеү тураһында килешеү төҙөнө. Ошо тантана барышында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, уның урынбаҫары Сынтимер Баязитов юғары уҡыу йорто студенттары тәҡдим иткән яңы проекттар менән танышты.**

# СТУДЕНТТАР ҘА...

## Өфө хәстәрен хәстәрләһен

"Туғандар" проекты сиктәрендә Өфөнөң ҡараусыһыҙ һәм етем балаларҙы опекаға һәм аҫрауға алыусы 40 ғаиләһе ағзалары төрлө кәңәшмәләр, психологик тренингтар, уйын программалары, спорт саралары, уҡыуҙарҙа ҡатнашты. 2011 йылдың августында ошо ғаиләләрҙә тәрбиәләнеүсе балалар Ҡара дингеҙ буйында урынлашҡан "Кировсы" балалар пансионатында ял итте. Ә быйыл март айында балалар БДПУ-ның санаторий-профилакторийында һауыҡтырыу саралары үтте.

- Бөгөн 4 мендән ашыу бала ғаилә һәм ата-әсә йылыһынан мәхрүм. 500-ҙән ашыу бала интернат учреждениеларында тәрбиәләнә, - тине тантанала Ирек Ялалов. - Һуңғы ваҡытта етем бала үҙ өйөн, ғаиләһен тапһын өсөн күп кенә эштәр эшләнде. Был өлкәлә ҡыйынлыҡтарһыҙ ҙа булмай, йыш ҡына ҡала халҡының битарафлығына ла юлығып ҡуябыҙ. Мәҫәлән, Дим районында етем балалар өсөн торлаҡ йорт төҙөү тураһындағы проектҡа урындағы халыҡ ҡаршы сыҡты. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, беҙ был өлкәлә күп кенә эштәр атҡарҙыҡ.

Ирек Ишмөхәмәт улы билдәләүенсә, һуңғы йылдарҙа юғары уҡыу йорттары һәм ҡала округы хакимиәте араһында бәйләнештәр билдәһеҙ сәбәптәр менән өҙәләп торғайны. Хәҙер был хәлде төҙәтеү, хеҙмәттәшлекте тергеҙеү хаҡында уйланыла. М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты менән килешеүгә ҡул ҡуйыу - тәүге аҙым тип баһалана. Был хеҙмәттәшлек шулай уҡ юғары уҡыу йорто студенттары тәҡдим иткән инновацион проекттар һәм IT-технологиялар презентациялары араһынан иң кәрәклеләрен тормошҡа ашырыу буйынса ярҙам итеүгә лә ҡағыласаҡ.

- XIX-XX быуат Өфө ҡалаһының өс үлсәүле моделен төҙөүгә ҡағылышлы проект эшләүсе студенттар менән мотлаҡ хеҙмәттәшлек итәсәкбеҙ, - тине баш ҡала башлығы.- Сөнки ҡаланың бындай моделен төҙөү боронғо Өфө урамдары буйлап виртуаль экскурсия үтергә, ҡаланың архитектураһы, тарихы менән танышырға мөмкинлек бирәсәк. Шулай уҡ был баш ҡалабыҙҙа туризмды һәм инвестициялар индереүҙе киңәйтеүгә ярҙам итәсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Туғандар" проекты етем балалар өсөн генә лә түгел, ҡала округы хакимиәте менән тығыҙ бәйләнеш булдырған М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты өсөн дә, унда белем алған фекерле һәм ғәмле студенттар өсөн дә бик һөҙөмтәле булмаҡсы. Киләсәктә был төр хеҙмәттәшлектәр баш ҡалабыҙҙа урынлашҡан бөтән юғары уҡыу йорттары менән дә булдырылыр, тигән ышаныс ныҡына.**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ПЕДОФИЛҒА...

## көн бөтһөн шул

**Педофилдарға ҡарата ғүмерлеккә төрмәгә ултыртыу һәм химик кастрация яһатыу язаһын ҡулланыу кеүек сараларҙы көсәйтеү тураһындағы законға ҡул ҡуйылды.**

"Балиғ булмағандарға ҡарата башҡарылған енси характерҙағы енәйәттәр өсөн яуаплылыҡты көсәйтеү маҡсаттарында РФ Енәйәт кодексына һәм ҡайһы бер закон акттарына үҙгәрештәр индереү тураһында" Федераль закон Дәүләт Думаһы тарафынан ошо йылдың 7 февралендә ҡабул ителеп, 22 февралдә Федерация Советы тарафынан раҫлангайны. Тәүге тапҡыр енәйәттәр тураһындағы закондарға рәсми рәүештә "педофиллыҡ" термины индерелде. Законға ярашлы, 14 йәше тулмаған балиғ булмағандарҙы фәхишәлек шөғөлөнә һәм порнография таратыуға йәлеп иткән өсөн енәйәт яуаплылығы көсәйтелә. Максималь яза сараһы - 10 йылға иркенән мәхрүм итеү. Интернет аша балалар порнографияһы тараткан, балалар порнографияһы әҙерләгәндә башҡарыусы итеп баланы йәлеп итеү йәки порнографик үҙенсәлектәге сараларҙа баланы ҡатнаштырған өсөн енәйәт яуаплылығы индерелә. Бындай енәйәттәр өсөн 15 йылға тиклем иркенән мәхрүм итеү ҡарала.

Закон балиғ булмағандарҙың енси тейелгеһеҙлегенә ҡаршы енәйәт ҡылыусыларға ҡарата мәжбүри медицина саралары ҡулланыуҙың махсус тәртибен ҡарай. Атап әйткәндә, бындай саралар комплексында иҫкәртеүсе медикаментоз саралар, шул иҫәптән химик кастрация ла бар. Үҙ иҫ-аҡылында булыуын да иҫәпкә алып, енәйәтсенең енси характерҙағы психик сире тураһындағы суд-психиатрия экспертизаһы һығымтаһына нигеҙләнгән суд ҡарары ғына әлеге сараларҙы ҡулланыуға нигеҙ булып тора. Профилактик медикаментоз дауаланыуҙы граждандарҙың үҙ теләге менән дә алыу мөмкинлеге бар.

Педофилдарға ҡарата шулай уҡ шартлы рәүештә хөкөм итеүҙе һәм хөкөм итеүҙе кисектереүҙе ҡулланыу тыйыла, уларҙы шартлы-ваҡытынан алда иреккә сығарыу өсөн нигеҙҙәр ҡатғилештерелде. Төрмәнән сыҡҡан ана шундайҙарға амбулатор һәм стационар тәртиптә дауаланыу курсы тәғәйенләнеүе ихтимал. Мәжбүри дауаланыу сараһы ла ҡарала. Врач-психиатрҙар комиссияһы тикшереүҙәренең һөҙөмтәләре буйынса кеше педофилиянан дауаланған тип табылған хәлдә генә был саралар суд ҡарары менән туктатылыуға нигеҙ була ала.

Рәсәй Федерация Советы наркотиктар, психотроп матдәләр һәм прекурсорҙар менән сауҙа һәм контрабанда өсөн ғүмерлеккә иркенән мәхрүм итеү тураһындағы законды ла раҫланы. Шулай итеп, был өлкәлә енәйәтселәрҙе элеккегә ҡарағанда күпкә ҡаты яза көтә. Шул уҡ ваҡытта наркотиктар һәм көслө тәьҫир итеүсе матдәләр ҡулланып енәйәт ҡылыу яуаплылыҡты ауырлаштырыусы хәл тип билдәләнә.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓"Бөтә донъя өмәһе-2012: әйҙәгеҙ быны башҡарайыҡ!" акцияһы алдынан 15 майҙа Башҡортостан баш ҡалаһының 25 урынында экологик өмәләр ойоштороласаҡ. Сүп-сарҙан таҙартыласаҡ территориялар Өфөлә билдәләнгән дә инде. Яҙғы өмәләр ҡалабыҙҙы таҙараҡ итәсәк, иң мөһиме - "Бөтә донъя өмәһе-2012" акцияһын ойоштороу һәм үткәреүҙең анығ системаһын әҙерләү, Рәсәйҙә 15 сентябрҙә үтәсәк ҙур эко-проектты һынап ҡарау мөмкинлеген бирәсәк.

✓Өфөлә "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы-2012" төбәк-ара конкурсы тамамланды. 2012 йылдың иң яҡшы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы исеменә 57 педагог, шул иҫәптән Ырымбур, Һамар, Силәбе өлкәләренән биш уҡытыусы көс һынашты. Аҙаҡҡы турға иң яҡшылары сыҡты. Абсолют еңеүсенең исеме 31 мартта бәйгене ябыу тантанаһында билдәле буласаҡ. Сара М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында үтәсәк.

✓Өфөлә эпидемиологтар балаларҙың күпләп ауырыуын билдәләй. 3-6 йәштәгеләр төркөмөндә эпидемик сик 8,1 процентҡа артҡан, тип хәбәр иттеләр Роспотребнадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығында. Бындай хәл быйылғы миҙгелдә тәүге тапҡыр күҙәтелә. Белгестәр вирусы инфекцияларҙың таралыуын дымлы, һыуыҡ һауа торошонан күрә. Башҡа йәштәгеләр категориялары буйынса ауырыуҙың эпидемик сиктән артыуы күҙәтелмәй.

✓Башҡортостан "Китап" нәшриәте магазинында Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреатының тыуыуына 80 йыл тулыуға арнап сығарылған "Рәми Ғарипов. Тормошо һәм ижады" фотоальбомының презентацияһы үтте. Был уникаль баҫмаға шағирҙың әҫәрҙәре, көндәлектәренән өҙөктәр, автографтар, замандаштарының хәтирәләре, архив документтары, шулай уҡ ғаилә альбомынан фотоһүрәттәр ингән.

✓Режиссер Айнур Асҡаровтың "Башҡортостан" киностудияһында төшөрөлгән ҡыҫҡа метражлы "Енмеш" фильмы "Свирский миф" (Рәсәй) һәм "Кинодиалог стран Брикс 2012" (Һиндостан) фестивалдәренән еңеү менән ҡайтты. Унда ул Гран-приға һәм "Иң яҡшы ир-егет роле өсөн приз"ға лайыҡ булды. Яҙғыһын "Енмеш" фильмы Македония, Сербия, Франция, Испания һәм Германия илдәрендә конкурстарҙа ҡатнашасаҡ.

*АФАРИН!*

# ИНТЕРНЕТ ДОНЪЯҺЫНА...

## рухиәт орлоғо ташлайыҡсы



**"Шоңҡар" журналының "Минең Рәми" интернет-конкурсы ҡыҫҡа ғына ваҡыт дауам итеүгә ҡарамаҫтан, һөҙөмтәләре менән ҡатнашыусыларҙы ла, конкурсты ойоштороусыларҙы ла ҡыуандырҙы. Һәр хәлдә, журналдың баш мөхәррире Азамат ЮЛДАШБАЕВтың башҡорт йәштәрен милли рух нигеҙендә тәрбиәләү саралары эҙләү тураһында борсолоуҙарынан матур фәтеүә килеп сыҡты. "Минең Рәми" конкурсы хаҡында Азамат Рәмил улы һөйләй:**

- Йәштәрҙең интернет селтәрендә йомолоп ултырыуы күптән инде хәүефләндерә лә, борсолдора ла, уйландыра ла. Улар интернет донъяһында йәшәй, аралаша, таныша. Тик хәүефләндергәне был түгел: шул интернет донъяһында йәштәребеҙ өсөн рухи аҙыҡ булмауы борсой беҙҙе. Минең күҙәтеүҙәр буйынса ғына ла бөгөнгө көндә 30 меңдән 50 меңгә тиклем әүҙем интернет ҡулланыусылар үҫеп сыҡты. Һәм шуларҙы туған телгә, үҙебеҙҙең әҙәбиәткә, мәҙәниәткә, рухиәткә йәлеп итеү өсөн ни эшләргә була, тип уйланып йөрөгәндә, Рәми Ғариповтың тыуыуына 80 йыл тулыуға арналған саралар теҙмәһе кинәт кенә ошо конкурсты ойоштороу идеяһына этәрҙе. Иң ҡыҙығы шул булды: төшкә тиклем хеҙмәткәребеҙ Шамил Яубаҫаров менән яңы проект тураһында һөйләшеп бөткәйнек, төштән һуң йәш хеҙмәткәрҙәребеҙ Миңзәлә Асҡарова һәм Вадим Йомабаев килеп инде. Килеп инделәр ҙә: "Азамат ағай, Рәми Ғарипов ижады буйынса конкурс үткәрәйек әле", - тинеләр. Күк көнсәләрендә ниндәйҙер бер ҡарарҙың ҡабул булыуымы был, белмәйем. Әммә бер юлы 2-3 кешегә ошо уй килгән. Шулай итеп конкурстың форматы үҙенән-үҙе барлыҡҡа килде: бөгөнгө көндә видео төшөрөп, уны интернетҡа һалыу бер кем өсөн дә ауырлыҡ тыуҙырмай. Быны өсөн бары тик бик ҡиммәт булмаған кеҫә телефоны ғына кәрәк. Проектты уйлап, башлап ебәргән ваҡытта беҙ һөҙөмтәләр былай юғары булыр, тип күҙ алдына ла килтермәнек. Беренсенән, халыҡтың шул тиклем әүҙем булыуы ҡыуандырҙы ла, аптыратты ла: 28 көн эсендә конкурста 165 кеше ҡатнашты. Күрәһең, интернетта шундай проекттарҙың булмауы беҙҙе генә түгел, бөтә йәмәғәтселекте борсоған. Конкурс Башҡортостандың бөтә ҡала һәм районлары аша үтеп, Силәбе өлкәһенә лә барып етте. Йәш буйынса иң бәләкәй бәйгеселәр: Гөлмирә Нарынбаева һәм Илдар Дүшәнбаевҡа ике йәш булһа, иң олоһо - Зиннур Ишемғоловҡа 81 йәш ине. Ҡатнашыусыларҙың һаны, бер яҡтан, аптыратһа, икенсе яҡтан, ошо проектты күҙәтеп барыусы ҡулланыусыларҙың әүҙем булыуы көтмәгән хәл булды. Статистика күрһәтеүенсә, бер ай эсендә был ресурсты ун меңгә яҡын кеше инеп ҡараған. Тимәк, Рәми Ғариповтың шиғырҙары ун мең тираж менән сығып таралған, тигәнде аңлата был. Кешеләрҙең шул тиклем берҙәм булыуы һоҡландырҙы.

"Минең Рәми" башҡорт теле уҡытыусыларына балаларҙы киң майҙанға сығарыу өсөн дә ҙур мөмкинлек бирҙе. Конкурста ҡатнашҡан 165 кеше, ун меңдән артыҡ ҡарап барыусы ысын мәғәнәһендә шағирҙың исемен ҙурлап, ихтирам итеп, хөрмәт итеп, үҙ кеше күреп, "Минең Рәми" тип әйтә ала. "Минең Рәми" конкурсы тамамланғас, "Бельские просторы" журналынан коллегалар: "Был конкурстың аналогтарын тапманыҡ," - тине. Бәҡтиһән, былдай конкурстар быға тиклем башҡорт телендә генә түгел, башҡа телдәрҙә лә ғүмерҙә лә үткәрелгәне булмаған икән.

Әлеге көндә тағы бер яңы конкурс башлап тораბыҙ. "Минең Рәми" - дөйөм халыҡ конкурсы булһа, быныһы инде йәштәр өсөн үткәрелә. "Ҡош юлы" конкурсын "Юлдаш" мәғлүмәт һәм йыр-моң каналы менән берлектә, әлегә тиклем мәҙәниәт яҫылығында иғтибарҙан ситтә ҡалған социаль ҡатлам - гитарала үҙҙәре уйнап, башҡорт йырын башҡарыусылар конкурсы булараҡ ойоштораბыҙ. Бында мотлаҡ 16 йәше тулғандар ғына ҡатнаша ала, сөнки конкурс Ейәнсура районында фестиваль рәүешендә тамамланасаҡ. Бөгөнгө көндә башҡорт рухиәтендә бард сәнғәте юҡ. Әммә бына ошо конкурс уларҙы йыйып, системаға һалыу, был сәнғәтте үҫтереү өсөн әһәмиәтле буласаҡ. Социаль һәм ижтимағи йөкмәткеле йырҙарға айырым иғтибар бүләсәкбеҙ. Сөнки бард сәнғәтенең төп билдәләнеше - тормошҡа битараф булмау.

Тағы бер нәмәгә иғтибар итергә кәрәк: гитарасылар конкурсы ҡурайҙы, думбыраны, йә булмаһа, ҡылҡумыҙҙы инҡар итеүҙән түгел. Уларҙың бөйөклөгө, барлығы, даһилығы - шикһеҙ. Бөгөнгө көндә параллель рәүештә заман йәштәре мөхитенә хас булған башҡорт ҡала мәҙәниәте үҫергә тейеш. Ә башҡорт ҡала мәҙәниәте юҡ ул, тип әйтеү - ул башҡорт халҡының киләсәге юҡ, тиеү менән бер. Ошоноң ише конкурстар башҡорт халҡының аңына инеп оялаған битарафлыҡ һәм гәмһеҙлекте еңергә ярҙам итер, тип ышанабыҙ.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

*ҮӘТ ӘЙ!*

## ДӨЙӘ ТҮГЕЛЛЕГЕНДЕ ИҪБАТЛА...

**Автоһәүәҫкәрҙәр өсөн "коро" закон юҡҡа сығарылырмы һәм, әгәр ҙә ап-айыҡ водителде ЮХХДИ инспекторы туҡтата икән, үҙеңде нисек дөрөҫ тоторға, тигән һорауҙар буйынса үҙәк матбуғатта фекер алышыуҙар, бәхәстәр дауам итә.**

"Әгәр ҡағиҙәләрҙе яҡшы беләһегеҙ икән, алкотестер ярҙамында һеҙҙе төп башына ултыртырға иткән инспектор кемлегегеҙҙе аңлағас, тиҙ үк ниәтенән ҡайтасаҡ һәм "баҫалҡыраҡ" берәй водителгә бәйләнәсәк. Бына ул ҡағиҙәләр:

● Водителде туҡтатҡас, ҡыҙарған йөҙө, араҡы еҫе килеү кеүек башҡа төр билдәләр буйынса иҫереклектә ғәйепләп, инспектор водителде транспорт сараһы менән идара итеүҙән ситләштереү тураһында протокол төҙөргә тейеш.

● Унан водителгә ошо урында уҡ полиция тикшереүе үтергә тәҡдим ителә. Был процедура күрһәткестәрҙе яҙма рәүештә сығарып биреүсе алкометр ярҙамында үткәрелә.

● Инспектор ике яҡ өсөн дә таныш булмаған кешеләрҙән ике шаһит саҡыра һәм водителдән алкометрға тынын өрөүҙе талап итә.

● **Артабан водитель өс варианттың береһен һайлай:**

**Беренсеһе:** водитель алкотестерға өрөүҙән баш тарта һәм үҙен врач-наркологҡа алып барыуҙы һорай. Был осраҡта инспектор медицина тикшереүенә йүнәлтмә тураһында тағы бер протокол төҙөй.

**Икенсеһе:** приборға өрәһегеҙ һәм ул норманан юғары кимәлде күрһәтә. Был осраҡта ла водитель медицина тикшереүе үтеүҙе талап итә ала.

**Өсөнсөһө:** прибор бер ни күрһәтмәһә лә, тышҡы билдәләр (хәрәкәт йүнәлеше һәм телмәр боҙолошо һ.б.) буйынса инспектор врачҡа йүнәлтмә бирә.

Автомобилселәр хоҡуғын яҡлаусы коллегия президенты Виктор Травин әйтеүенсә, илебеҙҙә рөхсәт ителгән промилле минимумын кире ҡайтарырға тура киләсәк, моғайын. Был әле ҡайтанан һайланған ил президенты фекере менән дә бәйле. "Владимир Путиндың инициативаһы буйынса 2007 йылда 0,3 промилле норма булараҡ рөхсәт ителгәйне", - ти эксперт.

**Фәүзиә ИШБИРҘИНА әҙерләне.**

### әйткәндәй...




"Шоңҡар" журналының матур башланғысына ҡушылып һәм эйәреп, "Киске Өфө" гәзите лә интернетта башҡорт юморы оҫталарын "Алдар менән Ерәнсә ҡоро"на йыя һәм бәйге тоторға саҡыра. Ысын юмор, мәрәкә, мәҙәк, ләҡап, көләмәстең иң кәттәһе халыҡтың йәнле аралашыу мөхитендә йәшәй, халыҡ тарафынан ижад ителә икәнен беләбеҙ. Һуңғы ваҡытта сәхнәләрҙә тоҙһоҙ һәм "билдән түбән" мәрәкә һөйләүселәр күбәйеүен иҫәпкә алғанда, ысын юморҙы эҙләп халыҡ араһына сығыу мөҙҙәте еткәне ап-асыҡ аңлашыла. Шуға ла юмор оҫталарына мөрәжәғәт итәбеҙ: "Һеҙҙең ауылда нисектер, ә бына беҙҙең ауылда..." тип башлағыҙ һүҙегеҙҙе һәм йәшәгән төбәгегеҙҙәге, ауылығыҙҙағы ләҡап, көләмәс, мәрәкә хәлдәрҙе видеотаҫмаға яҙҙырып, "Вконтакте" сайтындағы "Киске Өфө" төркөмө"нә (**vk.com/kiskeufa**) ҡуйығыҙ һәм бәйгебеҙҙә көс һынашығыҙ. Тулыраҡ мәғлүмәтте лә шул сайтта тыбырһығыҙ.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Ҡан тамырҙарын таҙартыу

Күптәр юғары ҡан баҫымы менән яфалана. Уларға бигерәк тә ҡан тамырҙарын таҙартыу мотлаҡ. 1 стакан кипкән әнис (укроп) орлоғон һәм 1-2 ҡалаҡ бесәй үләне (валериан) тамырын 1 литр ҡайнар һыуға һалырға, ҙур термоста 1 тәүлек төнәтергә, һөҙөргә һәм 2 стакан бал ҡушырға, болғатырға.

Көн һайын ашарҙан ярты сәғәт алда берәр ҡалаҡ эсергә. Был дауаны 40 йәштән үткән һәр кем ҡуллана ала. Төнәтмәне һыуытҡыста һаҡларға.

### Күҙгә аҡ төшһә (бельмо)

1 балғалаҡ ваҡлап иҙелгән һуған иҙмәһен ярты стакан ҡайнаған һөткә һалырға, ныҡ итеп ябылған һауытта 8 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Шуны йылымыс хәлендә аҙнаһына 2 тапҡыр күҙгә 2-шәр тамсы тамыҙырға. Аҡ бөткәнсе дауаларға. Төнәтмә һыуытҡыста һаҡлана.

### Аяҡ тирләһә

❖ Иртәнсәк табанға, бармаҡтар араһына бор кислотаһы онтағын һибергә, йомшаҡ ҡына итеп һыларға, кизе-мамыҡтан ойоҡбаш кейергә. Кискеһен аяҡты йылы һыуҙа йыуырға;

❖ киптереп, онтаҡҡа әйләндерелгән имән ҡайырыһын аяҡҡа һибергә, ойоҡбаш кейеп ятырға. Иртәнсәк аяҡтарҙы һалҡын һыуҙа йыуырға.

### Яҡшы кәйеф өсөн

Кәйеф күтәренке булһын өсөн шыйыҡлыҡты күп эсергә кәрәк, көнөнә 2-3 литр булһа, бигерәк яҡшы. Минераль һыу, еләк-емеш сәйе, йәшелсә һуттары бик файҙалы. Шыйыҡлыҡ организмдағы натрий күләмен кәметә, тыныс йөҡлата. Шыйыҡлыҡ менән бергә организмдан зыянлы матдәләр ҙә сыға.

### Лимонлы массаж

Киҙеү мәлендә, һыуыҡ тейгәндә лимондың һутын һығып алырға һәм ҡабығы менән табанды ныҡ итеп ышҡырға. Лимон тәме ауыҙҙа ла беленер, ҡанға ла таралыр, йүнәлергә лә ярҙам итер.

### Үпкәне таҙартыу

2 балғалаҡ һыйыр майы, 2 сей йомортҡа һарыһы, 1 балғалаҡ балды бергә болғатырға. Шуны көнөнә 4 өлөшкә бүлеп ашарға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ТЕЛЕМ-ТЕЛГЕНӘМ...

# ИКЕНСЕГӘ "ТЕЛ АСЫЛЫУ",

## йәки Телде байытыуҙың ниндәй юлдары бар?

**Тауышым яҙылған яҙмаларҙы тыңларға тура килһә, "паразит" һүҙҙәрҙе күп ҡулланыуым күңелдә ҡыра. Мәктәп йылдарында башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә әҙәби стилдә һөйләшергә апаруҡ әүәҫләнеп алһаҡ та, артабан үҙ телмәрем өҫтөндә эшләмәүем бөгөнгә һөҙөмтәгә - "ағас теллелеккә" килтергәндер, тип уйлайым. Фәнни, рәсми һәм фәнни-популяр стилдәрҙә телмәр тоторға тура килһә, "теге", "ни", "ну" тигән һүҙҙәр килеп инә телгә. Дөрөҫ итеп һөйләшер өсөн матур һөйләшкән кешеләр менән аралашырға кәрәктер, тигән уй менән миңә ярҙам итә алырҙай уҡытыусыларыма мөрәжәғәт итергә булдым.**

Телмәремдәге проблемаларым, уларҙан уңайһыҙланыуым тураһында абруйлы ил ағаһы, телсе остазыма - Вәкил Исмәғил улы Хажинға әйткәс, ул әҙәби әҫәрҙәрҙе күберәк уҡырға кәңәш итте: "Һәҙиә Дәүләтшинаның, Зәйнәп Биишеваның теле бай", - тине ул. Тағы ла: "Үҙ алдыңа һөйләш", - тине һәм билдәле ораторҙар араһынан кемдеңдер ауыҙына таш тултырып телмәр тотоуы, кемдеңдер диңгеҙ ярында тулҡындар тауышын еңергә тырышып ҡысҡырыуы, таҙа һөйләшергә өйрәнеүе тураһында миҫал килтерҙе.

Был "шыраулы" телде нисек шымартырға, тигән шундай уҡ һорау менән Сибайҙың "Атайсал" гәзите мөхәррире, яҙыусы Хәйҙәр Тапаҡовҡа шылтыраттым. Йылы ғына һөйләшеү килеп сыҡты, борсоған һорауыма ентекле яуап алдым. Әҙәби әҫәрҙәр уҡыу менән бергә, көҙгө алдына баҫып, үҙ алдыма һөйләргә, әммә стилде, төрлө телдәрҙе, терминдарҙы бутамаҫҡа, һөйләү менән бер рәттән, ым-ишараларға ла иғтибар итергә кәрәк, тигән кәңәш бирҙе Хәйҙәр ағай. Халыҡ алдында сығыш яһарға тура килһә, телмәрҙе мөмкин тиклем ҡыҫҡа тоторға кәрәклеген дә иҫкәртеп ҡуйҙы.

Дөрөҫ һөйләү проблемаһы менән ҡыҙыҡһынып, тағы бер-нисә әңгәмәсемдән түбәндәге фекерҙәр ишеттем: Марат исемле ағай әйтеүенсә, ҡайһы бер кешеләр үҙенең әсә телендә һөйләшергә ояла, кәмһенә һәм йәмәғәт урындарында, үҙе лә һиҙмәстән, һөйләшкәндә тауышын әкренәйтә төшә. Һөҙөмтәлә ундайҙар үҙ телендә рәхәтләнеп һөйләшмәй, ә ауыҙ эсендә "бутҡа бешерә". Марат ағай, шулай итеп, беҙҙе ҡыҙыҡһындырған мәсьәләнең психологик аспектына иғтибар иттерҙе. Хәким исемле студент егет һөйләгәндәр ҙә ҡыҙыҡ тойолдо. Ул йәштәр араһында бик һыҡ таралған һүгенеү күренешенә борсолоуын белдерҙе. Йәш егет әйтеүенсә, бындай насар ғәҙәт уның үҙендә лә, дуҫтарында ла булған. Әммә көндәрҙән-бер көндө дуҫтары менән һүгенеүҙән бөтөнләй баш тартырға ҡарар иткәндәр. Дуҫтар бер-береһенә ҡарата цензор ролен үтәп, матур итеп һөйләшеү мәсьәләһен үҙҙәренсә - егеттәрсә хәл иткән. Берәү һүгенеү һүҙе ысҡындырһа, алыптай кәүҙәле спортсы дуҫтар уға "ярҙамға" килә икән: уны "дөмбәсләп", "оҙон" телде ҡыҫҡартыу сараһын күрәләр. Һүгенеү өсөн башҡа сиртеү, шаярып ойпалап алыу - егеттәр коллективында була торған бик урынлы һәм һөҙөмтәле алым ул.

Минең өсөн тағы бер остазымдың фекерен белеү мөһим ине. Ул - Баймаҡ районы Теләс ауылында йәшәүсе хаҡлы ялдағы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Суфия Миндеғол ҡыҙы Ғәбитова. Уҡытыусым әйтеүенсә, һөйләгән саҡта иң тәү сиратта йөкмәткегә иғтибар итергә кәрәк. Мәсьәлән, нимә тураһындалыр һүҙ башлаған саҡта фекереңдең инеш, төп һәм йомғаҡлау өлөштәренә иғтибар итеү шарт. Иң мөһиме - йомғаҡлау. Бер ҡанатлы һүҙ менән булһа ла дөйөмләштерелгән фекер тыңлаусыға бик ныҡ тәьҫир итеүсән, тине абруйлы уҡытыусы. Суфия Миндеғол ҡыҙы үҙенең студент йылдарындағы хәтирәләрен дә тағатып, Рәми Ғариповтың шиғыр кисәләрендәге сығышын иҫкә алды: "Рәми Ғарипов үҙенең тәрән мәғәнәле, хисле шиғырҙарын бер ниндәй артислыҡ күрһәтмәй генә, һөйләгәндә, талғын ғына итеп һендерә һөйләй ине. Ул заманда бик күп шағирҙарҙың кисәләре үтте, әммә башҡаларҙың әҫәрҙәре хәтерҙә ҡалырлыҡ булмаған, күрәһең", - тине уҡытыусым. Рәми Ғариповтың шиғырҙарын нисек һөйләгән хәлдә лә уларҙың күңел арбағыс булыуы тураһындағы фекере менән матур һөйләү серенең йөкмәткеле булыуын асырға ярҙам итте уҡытыусым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Оҫта телле кешеләр тәҡдим итеүе буйынса, әҙәби китаптар уҡыу, күберәк аралашыу, хатта үҙ алдыңа һөйләшеү һымаҡ саралар икенсе тапҡыр тел "асылыу"ға ярҙам итеүе мөмкин. Үҙемде борсоған һорауҙарға яуаптар ала-ала, тағы ла ошондай һығымтаға килдем: яҡшы әҫәр уҡыу матур итеп һөйләшергә өйрәтә. Ә әҙәби әҫәрҙәр уҡыу, уларҙы сағыштырып ҡарау - анализ яһауға, шулай булғас, фекерләүҙе үҫтерергә ярҙам итә. Хәйер, был юҫыҡтағы эҙләнеүҙәрем башлана ғына шикелле...**

**Әйткәндәй, бөгөн беҙ күберәк яҙып аралашабыҙ: электрон технологиялары сәбәпсе быға. Быны үҙенә күрә уңышлы яҡтары бихисап булһа ла, йәнле аралашыу, тере телмәргә етмәйҙер барыбер...**

Илгиз ИШБУЛАТОВ.

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

**Һәр атай-әсәй балаһының зирәк булыуын теләй: иртәрәк һөйләшһен, алдараҡ атлап китһен, тиҙерәк хәреф таный башлаһын. Бындай ынтылыштар, теләк-хыялдар атай-әсәйгә генә түгел, йәмғиәтебеҙгә лә хас. Баланы мөмкин тиклем иртәрәк уҡырға өйрәтеү, бәләкәй саҡтан уҡ сит телдәр өйрәтергә ынтылыу һәм башҡа шундай ниәттәр арҡаһында мәғариф системаһына туҡтауһыҙ үҙгәрештәр индерелә. Бындай үҙгәрештәрҙең заман ихтыяжынан килеп сыҡҡандары ла, сит илдән күсермә яһағандары ла, алдын-артын ҡарамай хәл ителгәндәре лә бар. Шул арҡала байтаҡ яңылыҡтар үҙ-үҙҙәрен аҡламай. Тәжрибәләр үткәрелә лә туҡтатыла... Артабанғыһы башлана.**



# ТӘНӘЙҘӘРГӘ ТӘҒӘЙЕН ТӘРБИӘ

## Унынсы һабаҡ: "Һәр нәмәнең үҙ миҙгеле, үҙ йәйы"

Әммә тәжрибәләр бит станоктар менән түгел, балалар менән үткәрелә (ун йыллыҡ, ун бер йыллыҡтар, туған телдәге мәктәптәрҙе ябып, рус телендә генә уҡытыуға күсеү, алты йәштән мәктәпкә бирәү, балалар баҡсаларында дәрестәр үткәреү, ике-өс йәштән бер нисәшәр тел өйрәтеү, Берҙәм дәүләт имтиханы һәм башҡалар). Һәр тәжрибәнең "иҫ китмәле ыңғай яҡтарын" ауыҙ тултырып маҡтай башлайҙар, иң элек атай-әсәй күңеленең иң нескә яҡтарына иҫәп тоталар: балаң юғары уҡыу йортона тотҡарлыҡһыҙ инеп китәсәк, имеш. Ә баланы тик бер генә - юғары уҡыу йортонда уҡытыу тигән маҡсат менән генә яҡты донъяға тыуҙырған атай-әсәйҙәр был тәжрибәгә мөкиббән китә. Балаһын "вундеркинд" итергә тырышыусы ғаиләләр ишәйеп китте бер заман. Ҡайҙа ул вундеркиндар?

Тәжрибәләрҙең һаулыҡҡа зыяны күренеп тора. Армия сафына саҡырылған егеттәрҙең ни дәрәжәлә сәләмәт булыуында ла тәжрибәләрҙең эҙемтәһе бар: алты йәштән уҡытыу йылдарында күпме бала күҙлек кейергә мәжбүр булды. Былары күҙгә күренгән хаталар. Ә баланы туған теленән, туған моңонан, тимәк, тотош рухи донъянан мәхрүм итеүҙең эҙемтәһе ваҡыт үтеү менән күренә. Туған моңһоҙ ҡалған бала иҫ китмәле дауаланыу сараһынан да мәхрүм була. Тәбиғәт туған моң аша сәләмәтләнеү сараһы - күңел йыуатыу бүләк иткән беҙгә.

Бала һаулығы өсөн иң төп яуаплы кеше - атай-әсәй. Тимәк, үҙгәрештәрҙең "уңышын" улар йыя.

Ә быуаттар буйы камиллаша килгән халыҡ аҡылына күҙ һалһаҡ, тәрбиә нигеҙендә иң мөһиме - һаулыҡ хаҡында хәстәрлек ята. Балаға белем, һөнәр биреү ынтылышы иң элек уның һаулығын хәстәрләүҙән башлана. Башҡорт халҡында ул халыҡ иждадында, бигерәк тә ҡобайырҙарҙа, мәҡәлдәрҙә сағылыш тапҡан, тип билдәләп киткәнебеҙ бар. Һаулыҡ һаҡлау, белемгә ылыҡтырыу - тәбиғәт ҡанундарынан ситләшмәй генә хәл ителгән. Ошо ҡанундарҙан сығып фекер йөрөтһәк, бала менән һәр төрлө тәжрибәләр эшләү дөрөҫмө? Әлбиттә, юғарынан төшкән ҡарарҙарҙы атай-әсәй ихтыяры менән үҙгәртеп булмай. Әммә һәр атай-әсәй алтын урталыҡ таба ала. Әйтәйек, бер кем дә баланы өс йәштән хәреф танырға өйрәт, алты йәше тулыр-тулмаҫтан мәктәпкә бир, тип, ирекһеҙләмәй. Бер кем дә баланы туған теле иҫәбенә рус телендә генә һөйләштер, тип тенкәгә теймәй. Бер кем дә, балаң тиҙерәк атлап китһен, тип тынғыһыҙламай. Һәр төрлө күнекмәләр эшләтеп, спорт менән шөғөлләндереүҙән дә тыймай. Былар атай-әсәй ихтыярында.

Баланың аҡыл, аң үҫеше физик әҙерлеккә бәйле. Баланың аң үҙгәреше уның йәшенә бәйле. Баланы ни тиклем иртәрәк өлгөртәм тиһәң дә, йылды тәшкил иткән ун ике айҙы ла, айҙарҙы тәшкил иткән көндәрҙе лә ҡыҫҡартып та, оҙайтып та булмай. Әйтәйек, ете йәштә тештәр алмашына - зиһене белем ҡабул итеүгә әҙер. Зиһендең аңлы итеп белем ҡабул итеүен һис кенә лә йәһәтләп булмай, сөнки ул теш алмашыныуы менән бәйле. Шуға ла алты йәштән уҡытып маташыу үҙен аҡламаны.

Данлыҡлы "Урал батыр" эпосында Йәнбирҙе уларына былай ти:

*Икегеҙ ҙә - баламһыҙ,*
*Күҙебеҙҙең ҡарамһыҙ,*
*Тешәр сағығыҙ үтмәгән*
*Быуыныгыҙ ҡатмаған*
*Ҡулға суҡмар тоторға,*
*Ҡошҡа шоңҡар сөйөргә,*
*Әле арыҫлан менергә*
*Миҙгелегеҙ етмәгән...*

Тимәк, һәр нәмәнең үҙ миҙгеле. Тик миҙгеле еткәс тә барыһы ла бер юлы үҙенән-үҙе була икән һүҙ түгел. Оло, ҡартмарлы эштәр башҡарыр алдынан бәләкәйҙәренән башлап күнегеүҙәр үткәрә торорға кәрәк.

*Күнегергә һыбайға -*
*Ана, болан менегеҙ,*
*Сыйырсыҡтың тубына*
*Яғылбайҙы сөйөгөҙ.*

Быны менән нимә әйтке килә, ҡәҙерле атай-әсәйҙәр! Һәр нәмәнең үҙ миҙгеле. Һәр баланың үҙ һәләте. Осҡанда - ҡарлуғас уҙыр, һайрағанда - һандуғас уҙыр, ти халыҡ. Бала бағыуҙы тәрбиәнең ышаныслы тағандарынан башларға кәрәк. Тағандар өсәү: һаулыҡ, рухи сәләмәтлек, үҙ намыҫың алдында яуаплылыҡ. Ошо өс таған ҡаҡшамаһа, бала белемгә лә әйә булыр, тәбиғи һәләтен дә аса алыр, маҡсатына ла өлгәшер, атай-әсәй йөҙөнә лә ҡыҙыллыҡ килтермәҫ, ололарға хөрмәт күрһәтер, кеселәргә кеселекле булыр. Артабанғы мәҡәләләрҙә, халыҡ аҡылына таянып, ошо өс тағанды нисек итеп ҡаҡшатмау хаҡында әңгәмә ҡорорбоҙ.

Мәрйәм БУРАҠАЕВА.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы тәрбиәләү әсбабы бына шулай аҡрынлап яҙыла. Мәрйәм апай Бураҡаеваның яҙғандарына башҡа педагогтарҙың, өләсәй-олатайҙар, атай-әсәйҙәрҙең дә ҡушылыуын теләйбеҙ: үҙ һабаҡтарығыҙ, кәңәш-фекерҙәрегеҙ, тәжрибәгеҙ менән һеҙ ҙә уртаҡлаша алаһығыҙ. Милләт киләсәге - тәнәйҙәр ҡулында һәм тәнәйҙәребеҙҙе дөрөҫ тәрбиәләүгә бөтөн көсөбөҙҙө һалырға тейешлегебеҙ хаҡында тағы бер тапҡыр уйланайыҡ әле, йәмәғәт. Хаттарҙарҙарға көтәбеҙ.**

ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!

**Тарих - дәүер бурандарына күмелеп, ваҡыт даръяларында аҙашып, мәл туҙандарына буталып, беҙҙең көнгә төрлө интерпретацияла килеп еткән фән. Быуаттар һуҙымында алышынған һәр хаким уны үҙ файҙаһына борорға тырышҡан. Һөҙөмтәлә ил генә түгел, Башҡортостан тарихында ла бик күп "аҡ тап"тар барлыҡҡа килгән. Әммә тарих фәне шуныһы менән үҙенсәлекле лә - унда уйҙырмаға, хаталарға, ялғанға урын табылһа ла, ваҡыт һәр нәмәне үҙ урынына ултыртып, йылдар уҙғас та архив материалдары хаҡлыҡты өҫкә сығара.**

**Башҡорт дәүләт университетының Археология, боронғо һәм урта быуат тарихы кафедраһы РФ Мәғариф һәм фән, БР Фәндәр академияһының Гуманитар тикшеренеүҙәр институты менән берлектә үҙғарған "Башҡортостан Республикаһының индустриаль мирасы: барлыҡҡа килеүе, модернизацияланыуы, хәҙерге торошо" тигән темаға төбәк-ара ғилми-ғәмәли конференцияһында ла тармаҡ мәсьәләләренә тарихи күҙлектән баһа бирелде. Пленар ултырышта тармаҡ мәсьәләләренә дөйөм ҡараш ташланһа, секция ултырыштарындағы сығыштарҙа уларға ентекле анализ яһалды. Йомғаҡлау өлөшөндә республика етәкселегенә мөрәжәғәт ҡабул ителде. Әлбиттә, был сарала дәүләт етәкселеге лә ҡатнашһа, бәлки, күтәрелгән мәсьәләләрҙең тарихсылар өсөн генә түгел, ә дөйөм республика мәнфәғәте өсөн әһәмиәтле булыуын үҙ күҙҙәре менән күреп, үҙ ҡолаҡтары менән ишетерҙәр ине. Әлегә бары тик уларҙың ошо проблемаларға ҡасан йөҙ менән боролоуын көтөргә генә ҡала. Артабан гәзит биттәрендә был мәсьәләгә ҡабат урап ҡайтырбыҙ, хәҙергә сараның төп маҡсаты, киләсәк быуындар өсөн әһәмиәтен асыҡлау ниәтенән кафедра мөдире Нәзир Мырҙабай улы ҠОЛБАХТИНдың яуаптарын тыңлайыҡ.**

# БЫЛ ТАРИХТА...

## завод-фабрикалар тарихы ғына түгел



- Конференцияның төп маҡсаты - республика етәкселегенең иғтибарын йәлеп итеү. Сөнки беҙ, ғалимдар, нисәмә йылдар ошо йүнәлештә эш алып барабыҙ, крайҙың индустриаль үҫешенең айырым аспекттары, төрлө осорҙары буйынса 12 фән докторы һәм 17 фән кандидаты шөғөлләнә, юғары курс студенттары араһынан өмөтлө алмаш кадрҙар әҙерләнә. Урал өлкәләренән беҙҙең менән хеҙмәттәшлек итергә әҙер коллегаларыбыҙ ҙа бар. Был - ҙур эшлекле команда. Эйе, идея бар, фәнни нигеҙ бар, әммә барлыҡ идеяларҙы тормошҡа ашырыу өсөн дәүләт тарафынан финанс ярҙамы, крайҙың индустриаль мирасын планға ярашлы өйрәнеү буйынса ғилми көстәрҙе берләштереүсе, координациялаусы фәнни үҙәк юҡ. Ә Свердлов өлкәһендә был мәсьәлә менән РФА-ның Урал бүлексәһенең тотош Тарих һәм археология институты шөғөлләнә. Беҙҙең БФА-нда шундай уҡ институтта ике ғалимға ярты ставка (0,25-әр) бүленгән. Был - эш өсөн түгел, ә күҙ буяу өсөн генә ҡуйылған ставкалар.

**➔ Нәзир Мырҙабай улы, ныҡлап уйлап ҡараһаң, индустриаль мираҫ - ул бөгөнгө иҡтисадтың, иҡтисадты булдырыусы сәнәғәттең, тормош кимәленең, йәшәйештең нигеҙен тәшкил итә түгелме?**

- Тап шулай. Шуға ла мин бөгөн, һуңғы 20 йылда илдә, республикала ныҡлы индустриаль база булдырылды, тип һөйләгәндәре менән төптә килешмәйем. Ныҡлы база күпмелер йыл элек түгел, быуаттар һуҙымында формалаштырыла. Быны тарихи, архив документтары ла раҫлай. Мәсәлән, Башҡортостан индустрияһы үҫешенең тамырҙары тәрәндә ята. Боронғо замандарҙа уҡ аҫаба халыҡ баҡыр һәм тимер мәғдәне, ҡиммәтле металдар, тау тәлсәре һәм башҡа ҡаҙылма байлыҡтарҙың яткылығын белгән. Улар металды хужалыҡта, хәрби йыһазда, кейем һ.б. әйберҙәрҙе биҙәүҙә ҡулланған. XVIII быуаттың 60-70-се йылдарындағы академик экспедицияларҙа батша чиновниктарын һәм экспедиция етәкселәрен Башҡортостан территорияһында йәшәгән боронғо халыҡтың шул тиклем күп тәбиғәт ресурстарын үҙләштереүен раҫлаусы нәмәләрҙең күплеге хайран итә. Был турала күп яҙалар, әммә берәү ҙә аныҡ ҡына уның ниндәй ваҡытҡа ҡараганын, кемдеке булыуын әйтә алмай. Әммә шуныһы хаҡ - Рәсәй территорияһында Башҡортостан биләмәһен индустриаль үҙләштереү иң тәүгеләрҙән башланған.

**➔ Ошо фактты раҫлаусы дәлилдәр килтерһәгеҙ, һөйләшеү нигеҙлерәк булыр ине...**

- XVIII быуат дауамында ғына аҫаба башҡорт ерҙәрендә 102 тау заводы төҙәлә. Улар өлөшөнә Рәсәй сығарған баҡырҙың - 67,3, суйындың 42,3 проценты тап килә. Быуат һуңында инде Башҡортостан илдең алтын табыу сәнәғәте үҙәге булып тора. 1773 йылда мәғлүм булған 373 Пермь мәғдәнсеһенең 360-ы ғәйнә башҡорттары була. Улар араһында бигерәк тә Исмәғил Тасимов киң билдәлелек яулай. Тап уның һәм ғаилә ағзаларының инициативаһы һәм финанслауы менән Санкт-Петербургта беренсе тау училищеһы асыла, һуңынан ул Рәсәйҙә беренсе Тау институтына әүерелә. Шулай уҡ тарихсыларға Рәсәйҙә беренсе нефть эшкәртеү заводтары төҙәгән Надир Уразмәтовтың да исеме яҡшы таныш.

XIX быуатта Башҡортостан индустрияһы күп тармаҡлыға әйләнә. Тарих фәндәре докторы Р. З. Мөҙәрисовтың раҫлауынса, тап ошо ваҡытта Урал сәнәғәте көрсөк, торғонлоҡ кисергәндә беҙҙең крайҙың сәнәғәте, киреһенсә, үҫешә генә.

Граждандар һуғышы йылдарында сәнәғәт тулыһынса емерелеүгә ҡарамаҫтан, капиталистик мөнәсәбәттәр һәм эске баҙар үҫеше алтын табыуҙың, урман эшкәртеүҙең, енел һәм индустрияның башҡа, ҙур сығымдар талап итмәгән тармаҡтары тиҙ арала тергеҙелеп, артабан үҫеш ала. Тап НЭП йылдарында Башҡортостанда социалистик индустриализацияны тормошҡа ашырыу насип була ла инде.

Девон нефтен асыу республиканың индустриаль үҫешенең яңы осорона нигеҙ һалып ҡына ҡалмай, уның бик күп тиҫтә йылдарға өҫтөнлөклө йүнәлешен билдәләй. Башҡортостан илдә нефть һәм газ табыусы алдынғы төбәктәрҙең береһенә әүерелә.

Бөйөк Ватан һуғышы крайҙың индустриаль үҫешенә бер ни тиклем үҙгәрештәр индерә - көнбайыштан һәм үҙәк өлкәләрҙән эвакуацияланған заводтар фронт ихтыяжын ҡәнәғәтләндереп кенә ҡалмай, беҙҙең сәнәғәтте тағы ла күп тармаҡлыраҡ итә.

Ил торғонлоҡ кисергән XX быуаттың 60-70-се йылдарында тап Башҡортостанда индустрия етеҙ үҫешә. СССР-ҙа һәм Европала иң ҙур булып һаналған нефть эшкәртеү, нефть химияһы, химия заводтары төҙәлә, хәрби заказдар буйынса эшләүсе, йыһанды үҙләштереүгә йүнәлтелгән ҡеүәттәр һ.б. барлыҡҡа килә.

Үҙгәртеп ҡороуҙар һәм иҡтисади реформалар йылдары Рәсәйҙә индустрияны емереү осоро булһа, республика етәкселегенең индустриаль мираҫҡа һаҡсыл ҡарашы төп производство ҡеүәтен һаҡлап ҡалыу, яңы сәнәғәт объекттары төҙөүгә ярҙам итә. Әммә Башҡортостан сәнәғәтенең хәҙерге торошон ентекле тикшерергә кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Республиканың индустриаль үҫеше бай һәм күп быуатлыҡ тарихҡа эйә. Ул завод йәки фабрика тарихы ғына түгел, ә йөҙҙәрсә, меңдәрсә халыҡтың хеҙмәт ҡаһарманлығы тарихы. Ул - завод-фабрикалар төҙөлгәндә үҙенең аҫаба ерҙәренән яҙған башҡорттар тарихы. Ул - бөгөн Рәсәйҙең терәк төбәктәренең береһе булып торған республика тарихы. Ул - киләсәк тарихы...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# БАШҠОРТ ТАРИХЫ ҺӘМ ЭТНОГРАФИЯҺЫ

**1912 йылда татар телендә Мөнир Һаҙыевтың "Башҡорт тарихы" тип аталған китабы донъя күрә һәм ул X быуаттан XVIII быуат урталарына тиклемге башҡорт тарихын беренсе тапҡыр популяр итеп аңлатырға тырышыу ынтылышы булып тора. Китапта автор рус сығанаҡтары менән бер рәттән, М.И. Өмөтбаев, Ш. Мәрйәни хеҙмәттәрен дә ҡуллана.**

Башҡорт-венгр бәйләнештәре тураһында М. Һаҙыев, мадьярҙар Уралда йәшәгән һәм уларҙы бәжәнәктәр ҡыҫырыҡлау һөҙөмтәһендә 884 йылда Алмус етәкселегендә көнбайышҡа киткәндәр, тип яҙа. Венгрҙар үҙҙәрен мадьярҙар тип атай, ә боронғо ислам авторҙары уларҙы хингер, маждгар, маждгард, ҡайны берҙәре бишгирд тип атап йөрөтә. Шуға ла ғалим, мадьярҙар башҡорттарҙың ырыу-ҡәбилә составына ингән, тип күҙаллай.

Йәш милли интеллигенция вәкилдәре араһында төрки тарихын боронғо замандарҙан һуңғы осорға тиклем объектив яҡтыртыуға иғтибар бүлеүселәр арта. Йәш башҡорт ғалимы Әхмәтзәки Вәлидиҙең 1912 йылда Ҡаҙанда донъя күргән "Төрөк үә татар тарихы" китабы ошо теләктең тормошҡа ашыуына миҫал була ла инде. Китапты Ғәлимйән Ибраһимов, Йософ Аҡсура (Истанбул), Исмаил Гаспринский (Бағсаһарай), Ҡаҙандың көнсығышты өйрәнеүсе ғалимдары Н. Ф. Катанов, В.А.Богородский, Петербург ғалимы В.В. Бартольд, немец ғалимы Мартин Хартман, венгр төркиәтсеһе Вамбери һәм башҡалар юғары баһалай. З. Вәлиди ғилми мөхиттә абруйлы һаналған Ҡаҙан университеты ҡарамағындағы Археология, тарих һәм этнография йәмғиәтенә мөхбир- ағза итеп ҡабул ителә.

З.Вәлидиҙең тәүге хеҙмәттәрендә традицион мәҙәниәт, төрки халыҡтарының, шул иҫәптән башҡорттарҙың донъяға ҡарашы проблемалары буйынса тикшеренеүҙәре айырым урын биләй. Уның "Бөрйән башҡорттары" мәҡәләләрендә бөрйән ҡәбиләһенең бай фольклор мирасы "боронғо төрки рухи мәҙәниәтен һаҡлаусы" булараҡ өйрәнелә. Ғалим башҡорттарҙың милли музыкаһының, халыҡ хәтерендә һаҡланып ҡалған Иҙеүкәй, Мораҙым һ.б. тураһындағы эпик поэмалар һәм дастандарҙағы матур образдарҙың үҙенсәлектәрен анализлай. Уларҙа башҡорттарҙың традицион рухи мәҙәниәте элементтарын, уларҙың кешегә, тәбиғәткә ҡарашы системаһын тергеҙергә тырышыу аҙымдары яһала.

Башҡорттарҙың этник һәм социаль-сәйәси тарихының иртә этаптары буйынса ҡиммәтле күҙәтеүҙәр яҙыусы-мәғрифәтсе, ғалим, диндар Р. Фәхретдиновтың ташҡа баҫылған һәм ҡулъяҙма әҫәрҙәрендә тупланa. Ул Урал-Волга буйы төбәгенә һәм илдең төрки телле халыҡтарының йәмәғәт фекерен үҫтереүгә ҙур өлөш индерә. Ғалим төрки халыҡтарының боронғо һәм урта быуаттарҙағы тарихы, шул ваҡыттағы сәйәси һәм дини етәкселәр тураһында бихисап хеҙмәт ҡалдыра.

**К. КӘРИМОВ.**

✓ *Тәфтиләү яуҙары юҡҡа сығара алмаған башҡортто бөгөн тел белмәү юҡҡа сығарып бара. Хәҙер оло яуҙан түгел, күҙгә күренмәҫ ошо йәшерен яуҙан ҡурҡыу һәм һаҡланыу кәрәк, ә беҙ шуны танымаҫҡа тырышабыҙ.*

**Кем яҙмыш менән идара итергә, үҙе йәшәгән осорға яңы юлдар асып, үҙенең халҡын камилыраҡ һәм яҡшыраҡ киләсәккә алып барырға теләй, кем үҙенең йөрәгендәге ялҡын менән башҡаларҙы тоҡандыра ала, шул барыһын да инҡар итеүсе, аңлайышһыҙ, дошманлыҡҡа урын булған был донъяның үҙенә саҡырыу ташлай. Тотош донъяға, хакимдарға, ҡоролошҡа ҡаршы һүҙ әйтергә ҡурҡмаған Рәми Ғарипов та бары тик көрәшеп йәшәүҙең генә мәғәнәһе барлығын яҡшы төшөнгән шәхестәребеҙҙең береһе. Республикала халыҡ шағирының юбилейына арналған саралар дауам итә, уның шәхесе, ижады тураһында һүҙ күп әйтеләсәк әле, ә беҙ түңәрәк ҡорға саҡырылған йәш дуҫтарыбыҙға һүҙ бирәйек. Шулай итеп, Рәми ағай, рух, илһөйәрлек, телһөйәрлек һәм мәңгелек көрәш тураһында Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусылары Миңлегөл Хәсәнова менән Айназ Низаметдинов, Башҡорт республика лицей-интернаты уҡыусылары Марат Кинйәкәев менән Руслан Йосопов, Ф.Мостафина исемендәге 20-се башҡорт ҡала гимназияһы уҡыусыһы Ғәлиә Насретдинова менән әңгәмәләшәбеҙ.**



# КИЛЕШМӘҪКӘ һиңә,

**▸ Рәми Ғарипов һеҙҙең өсөн ниндәй шағир? Ниндәй сифаттары өсөн үҙ итәһегеҙ уны? Бөгөнгө йәштәрҙә Рәми сифаттары бармы, улар нисегерәк сағылыш таба?**

**Руслан:** Минең һәм тиҫтерҙәрем өсөн Рәми Ғарипов, иң тәүге сиратта, ғүмерен иле, теле өсөн көрәшкә бағышлаған шәхес. Шәхси теләктәрендә ил хәстәренән өҫтөн ҡуйма - шағирҙың был һүҙҙәре һәр беребеҙ өсөн аманат булып яңғырай. Заманалар үҙгәрә, әммә илебеҙ һәм телебеҙ беҙҙең ҡурсыуға мохтаж булып ҡала килә, шуға ла Рәми ағайға хас илһөйәрлек һәм телһөйәрлек кеүек сифаттар беҙҙә лә булырға тейеш. Тик ни өсөндөр күптәребеҙҙең күңелендә ил тойғоһо, уның өсөн яуаплылыҡ хисе юҡ, шуныһы үкенесле.

**Марат:** Рәми ағай көрәш юлы һалған, уның артынан барыусылар ҙа булған, әммә ундайҙарға барыбер ҙә ағайҙағы ҡыйыулыҡ етешмәгәндер. Рәми Ғариповтың, "Бөйөк рус шағиры А. Пушкин "О, великий русский язык" тип үҙ теленә дан йырлағанда, мин дә үҙ телемдә яҡлай алмайыммы ни?!" тип оран һалыуы үҙе бер һоҡланғыс күренеш. Минә тағы ла Рәми ағайҙың ябайлығы һоҡландыра. Үҙенә ышанырға, әммә башҡаларҙан үҙендә өҫтөн ҡуйырға ярамай, бына беҙ Рәми Ғариповтың ижадын, тормошон өйрәнеп беләбеҙ.

**Миңлегөл:** Бөгөн дә туған телебеҙҙең ҡайһы бер тиҫтерҙәребеҙ тарафынан мыҫҡыллауға дусар ителгәнен беләбеҙ. Үҙ туған телен яратҡан кеше бығаса түҙеп тора алмаясаҡ. Шуға үҙебеҙгә башҡорт телендә һөйләшергә, уны сит телдән ингән һүҙҙәр менән сүпләмәҫкә кәрәк. Телде үҫтереү өсөн күп нәмә талап ителмәй: һәр беребеҙ уны яҡлап, үҙ телебеҙҙә һөйләшеп йөрөһәк тә ҙур эш эшләнә.

**Руслан:** Тағы бер хәлде күҙәткәнем бар. Мин белем алған Башҡорт республика лицей-интернатына уҡырға килгән генә ваҡытта барыһы ла үҙ-ара башҡортса аралаша. Әле 11-се синыфта уҡыйым, арабыҙҙа тик рус телендә генә һөйләшеүселәр бар, балалыҡтан сығыуыбыҙҙы шулай белдерергә тырышабыҙмы икән, тип тә уйлап ҡуям. Тимәк, ҡала ерлеге йәш кешенең күңеленә барыбер ҙә үҙенең эҙен һала.

**Ғәлиә:** Был фекер менән бөтөнләй килешмәйем. Бына мин, мәҫәлән, ҡала гимназияһында белем алам. Әгәр ҙә ҡала ерлеге үҙ телендә онотоуға булышлыҡ иткән булһа, беҙ барыбыҙ ҙа русса ғына һөйләшкән булыр инек, әммә был улай түгел бит. Тимәк, был күренештең сәбәбен башҡа нәмәләр эҙләргә кәрәк. Шулай уҡ туған телдә һөйләшеү урыны - ул мәктәп кенә түгел бит, беҙ, мәҫәлән, өйҙә тик башҡортса аралашабыҙ.

**Айназ:** Ғаиләбеҙ менән Учалы ҡалаһына йәшәргә күскәс, мин, өс йәшлек бала, башҡорт малай-ҡыҙҙарының туған телдәрендә аралашмауын күреп аптырап, хатта үҙемсә бығаса протест белдереп, балалар баҡсаһында яңғыҙым уйнай инем. Мәктәпкә баргас, мөхит үҙенекен итте, күберәк русса аралашырға тура килде. Әле бына гимназияға уҡырға ингәс, туған телемдә һөйләшеп киңәнәм. Ғөмүмән, йәштәр башҡорт теле менән бик ныҡ ҡыҙыҡһына башланы, эске аң уянамы икән? Башҡортса яҙыулы футболкалар кейәләр, башҡорт сараларына йөрөйҙәр, Рәми Ғариповтың шиғырҙарын ятлайҙар. Кеше теге йәки был телдә аралашырға оялмаһын өсөн был һөйләшеү модала булырға тейеш, тигән фекер менән килешмәйем, мода үтә торған әйбер, ә телгә һөйөү йөрәктә булырға тейеш.

**▸ Һөйләшеүебеҙ был йүнәлешкә киткәс, әйтегеҙ әле, һеҙ, йәш быуын, баш ҡалалағы башҡорт теле мөхитенә ниндәйерәк баһа бирәһегеҙ?**

**Марат:** Ул мөхитте беҙ үҙебеҙ тыуҙырабыҙ бит. Кем генә булһаҡ та, ҡайҙа ғына уҡыһаҡ йәки эшләһәк тә, башҡорт телен яратырға, ошо телдә һөйләшергә бурыслыбыҙ. Был ысынлап та беҙгә йөкмәтелгән оло бурыс һәм уға бурыс тип ҡарарға күнегеү кәрәк. Минә башҡортса һөйләшеү, ошо телдә ғилми эштәр яҙыу гел уныш ҡына килтерә.

**Миңлегөл:** Туған телде һаҡлау урыны - ул ауыл, тигәнерәк ҡараш бар шул, йәнәһе, ҡалала башҡортса һөйләшеү мөмкин түгел. Балалары менән бәләкәй саҡтан гел русса аралашып, ҙурайып еткәс, башҡортса белмәй, тип яр һалған атай-әсәйҙәргә аптырайым. Атайың һәм әсәйең менән туған телеңдә аралашыу туған телеңә генә түгел, ә атаәсәңә лә ихтирам билдәһе бит!

**Руслан:** Рауил Бикбаевтың бер әҫәрендә әйтелгәнсә, Тәфтиләү яуҙары юҡҡа сығара алмаған башҡортто бөгөн тел белмәү юҡҡа сығарып бара. Хәҙер оло яуҙан түгел, күҙгә күренмәҫ ошо йәшерен яуҙан ҡурҡыу һәм һаҡланыу кәрәк, ә беҙ шуны танымаҫҡа тырышабыҙ.

**Марат:** Күп тел белеү яҡшы ул, ни тиклем күберәк беләһең, шул тиклем күңелең байыраҡ була. Мәҫәлән, беҙ лицейҙа инглиз телен дә ныҡлап өйрәнәбеҙ, русса ла беләбеҙ, әммә сит телдәрҙең нигеҙендә үҙ туған телең ятырға тейеш.

**▸ Ғалимдар әйтеүенсә, һәр кешелә Дон Кихот сифаттары була, фәндә хатта дон кихотлыҡ тигән философик төшөнсә лә бар. Дон Кихот ел тирмәндәренә ҡаршы көрәшһә, Рәми Ғарипов теле, халҡы өсөн көрәшкән. Ә һеҙ үҙегеҙҙе Дон Кихот тип атай алаһығыҙмы?**

**Марат:** Рәми Ғариповтың үҙе "ХХ быуат монологы" тип атама биргән "Дон-Кихот" шиғыры миндә бик ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты һәм мин уның буйынса тикшеренеүҙәр ҙә башҡарҙым. Донъя әҙәбиәтендә Дон Кихот образына мөрәжәғәт итеүселәр байтаҡ ҡына, Сервантестың ел тирмәндәренә ҡаршы көрәшеүсе Дон Кихоты күптәргә ижадҡа илһамландырған, сөнки йәшәү - ул үҙе көрәш. Көрәшмәйенсә генә бар нәмә менән килешеп йәшәү бик күңелле булмаҫ ине, моғайын. Дон Кихот менән Рәми ағай араһында уртаҡлыҡтар ҙа бар: икеһе лә ижади кеше, Дон Кихот рыцарҙар тураһындағы романдар уҡып, уйлап сығарылған донъяла уйлап сығарылған дошмандар менән көрәш алып барһа, Рәми Ғарипов ижады аша халҡын алға, көрәшкә әйҙәүсе булып тора. Дон Кихоттар глобаль категориялар менән эш итә, улар кешелеккә яҡшыраҡ булһын өсөн хатта донъяны үҙгәртергә тырыша.

Һәр бер кешелә Дон Кихотлыҡ бар, сөнки һәр кемдең йәмғиәттә килешмәгән әйберҙәре була, шулай уҡ унда халҡын алға әйҙәргә теләү тойғоһо булырға тейеш. Бына әле бында ултырыусыларҙың һәр береһен Дон Кихот тип атарға була, сөнки улар үҙ милләтенең киләсәгенә битараф түгел һәм ҡулынан килгәндең барыһын да эшләргә тырыша, ялған ҡиммәттәргә ҡаршы көрәшә.

**Айназ:** Көрәшергә кәрәк, әммә һуғышырға ярамай. Ут тоҡандырмай ғына һүҙ менән генә көрәшеп йөрөү ҙә оло яуаплылыҡ талап итә. Минең уйлауымса, кешене үҙенең артынан эйәртеү өсөн үҙенә өлгө булырға кәрәк. Мин, мәҫәлән, ошо егет шәп итеп ҡурайҙа, ҡумыҙҙа уйнай, бейей, таҙа итеп башҡортса һөйләшә,

*Илһөйәрлеккә урын гел булырға тейеш, әммә быны милләтселек менән бутарға ярамай. Илеңде, милләтеңде ярат, әммә башҡа халыҡтарҙы ла хөрмәтлә. Беҙ комсомол кеүек йәмәғәт ойошмалары заманына эләкмәнек, шулай ҙа йәштәрҙә берләштереүсе уртаҡ идеялы берәй ойошма булырға тейештер, тип иҫәпләйем. Мәҫәлән, башҡорт йәштәре иттифағы шундай ролде үтәй алыр ине. Илһөйәрлек тә, телһөйәрлек тә ғаиләнән килә. Атай менән әсәй ниндәй әкиәттәр һөйләй, ниндәй йырҙар йырлай, иң мөһиме, улар быны ниндәй телдә башҡара - ошонан күп нәмә тора. Әлбиттә, йәмғиәт тә йоғонто яһай. Беҙҙә Рәми рухы, мөхит үҙе тәрбиәләй, шағир исемен йөрөткән гимназияла уҡыуы үҙе бер бәхет. Элек "Туған тел" шиғырының мәғәнәһен төшөнөп етмәйенсә, һүҙҙәрен генә ятлағанмын икән, хәҙер уны бөтөнләй икенсе төрлө, күңелем аша үткәреп һөйләйем. Илһөйәрлекте ниндәйҙер ойошма йәки партия ғына тәрбиәләй алмайҙыр ул. Партия ҡушҡан өсөн генә илеңде ярата башлау мөмкин түгел.*

✓ *Минең өсөн әлеге ваҡытта атайым кумир булып тора. Үҙемде ысын башҡорт итеп иҫәпләй алырлыҡ тәрбиә бирә алды ул: бәләкәй саҡта әкиәттәр, ҙурайғас легенда-риүәйәттәр аша донъяны танырға өйрәтте.*



тип әйтер кимәлгә етергә бурыслымын. Башҡорт егете шулай уҡ айыҡ, насар ғәҙәттәр менән дуҫ булмаҫҡа тейеш. Өгөт-нәсихәткә ҡарағанда, эш эшләп күрһәтеү күпкә тәьҫирлерәк, тиҙәр, шулай ҙа бөгөн мин башҡорт шағирҙарының, яҙыусыларының халыҡты күтәрерҙәй һүҙ әйтеүҙәрен дә теләр инем. Тормош ҡатмарлыраҡ, хәүефлерәк булған һайын, шағир ҙа яуаплыраҡ булырға тейеш, тип Рәми ағай үҙе лә әйткән бит.

**Ғәлиә:** Һәр башҡорт кешеһендә көрәш рухы барҙыр ул. Салауатты иҫкә төшөрәйек, ул ере, милләте өсөн үҙен ҡорбан иткән, Аҡмулла, башҡорттарым мәғрифәтле булһын, тип, уларҙы белемгә әйҙәгән. Егеттәр менән килешәм, көрәшеү юлдары төрлөсә була, шуға беҙгә дөрөҫ маҡсаттар ҡуйып йәшәргә өйрәнергә кәрәк. Ҡараһаҡал, Ҡаһым түрә кеүек хәрбиҙәребеҙ, башҡа батырҙарыбыҙҙың аҡылына һәм ҡаһарманлығына һоҡланырлыҡ бит.

**▸ Йәш кешенең көнделендә батырлыҡҡа урын бармы? Киноларҙа, сәхнәлә һаман тарихи геройҙар һынланыш ала, бөгөн кумир булырҙай шәхестәр бармы? Кемде бөгөнгө көн геройы тип атар инегеҙ?**

**Айназ:** Мин мотлаҡ республиканың тәүге президенты Мортаза Рәхимовты беҙҙең заман геройы тип атар инем. Республиканы Рәми ағай тураһында һөйләшәбеҙ, мин уларҙың уртаҡ яҡтарына иғтибар итеп ултырам. Был шәхестәр икеһе лә система тарафынан ҡыҫырыҡланған, әммә үҙенең эшенең хаҡлығын иҫбатлай алғандар. Вәлидиҙе беҙҙең милләттең һуңғы ихтилалы тиҙәр, был ысынлап та шулайҙыр.

**Руслан:** Минең өсөн дә атайым өлгө булып тора. Үҙебеҙгә лә, үҫкәс,өлгөлө ата-әсәй булырға тырышырға кәрәк.

**▸ Элек пионер, комсомол ойошмалары әүҙем эшләне һәм улар йәштәрҙе илһөйәрлеккә саҡыра ине. Бөгөн илһөйәрлеккә урын бармы?**

**Айназ:** Илһөйәрлеккә урын гел булырға тейеш, әммә быны милләтселек менән бутарға ярамай. Иленде, милләтеңде ярат, әммә башҡа халыҡтарҙы ла хөрмәтлә. Беҙ комсомол кеүек йәмәғәт ойошмалары заманына әләкмәнек, шулай ҙа йәштәрҙе берләштереүсе уртаҡ идеялы берәй ойошма булырға тейештер, тип иҫәпләйем. Мәҫәлән, башҡорт йәштәре иттифағы шундай ролде үтәй алыр ине.

**Миңлегөл:** Илһөйәрлек тә, телһөйәрлек тә ғаиләнән килә. Атай менән әсәй ниндәй әкиәттәр һөйләй, ниндәй йырҙар йырлай, иң мөһиме, улар быны ниндәй телдә башҡара - ошонан күп нәмә тора. Әлбиттә, йәмғиәт тә йоғонто яһай. Был һөйләшеүҙә ҡатнашыусы һәр беребеҙҙең рухи яҡтан Бер нисә йыл дауамында башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса республика олимпиадаларында урындар яулайым, БР Президенты стипендиаты ла булдым, төрлө мәҙәни конкурстарҙа урындар алып торам. Әммә быйыл Рәми Ғарипов премияһына лайыҡ булыуымды иң ҙур уңышым, тип иҫәпләйем.

**Марат:** Төрлө бәйгеләр, олимпиадалар белем йәһәтенән камиллашырға мөмкинлек биреп кенә ҡалмай, ҡыйыулығың, сығыш яһау оҫталығыңды арттыра, яңы дуҫтар табыла. Быйыл Рәми уҡыуҙарында беренсе урын алдым, Стәрлетамаҡта үткән Ломоносов уҡыуҙарында, Ишембайҙа Әхмәтзәки Вәлиди уҡыуҙарында ҡатнашып, еңеүҙәргә өлгәшергә тура килде.

**Айназ:** Еңеүҙәр кешегә дәрт бирә, киләсәккә тағы ла пландар ҡороп йәшәй башлайһың. 2011 йылда үткән "Байыҡ" балалар бейеү конкурсында гран-при яуланым, шуға илдең һәләтле балалары исемлегенә инеп, Рәсәй Президенты гранты алдым. Ошо бәләкәй генә уңыштарымды күреп, Рәми Ғарипов исемендәге премия тапшырҙылар. Төрлө сараларҙа әүҙем ҡатнашам, үҙемде төрлө йүнәлештәрҙә үҫтерәм. Ҡурай бәйгеләрендә балалар араһында еңеүҙәргә өлгәштем, еңел атлетика буйынса Башҡортостан чемпионатында ике номинацияла икенсе урындар яуланым.

# КИЛДЕМ...

## донъя!

юғары үрҙәргә күтәрҙе, халыҡ өсөн күпме эштәр башҡарҙы!

**Ғәлиә:** Бер ниндәй заманда ла, бер ниндәй яуҙа ла ҡорал менән генә дошманды еңеп, кешене еңеүгә әйҙәп булмаған. Был ролде сәсәндәр үтәгән, сөнки шиғри һүҙҙең ҡәҙере һәр быуатта ла юғары баһаланған. Бөгөн йәмғиәтебеҙҙә шағирҙарыбыҙҙың тапҡыр һүҙе етмәйҙер, тип уйлайым. Халыҡтың рухын күтәреү, төрлө проблемалар хаҡында уйланырға этәреү өсөн улар ҙа яуаплы.

**Марат:** Төрлө кешеләрҙе кумир итеп ҡабул итергә була, кемгәлер берәй популяр йырсы, кемгәлер берәй уңышлы сәйәсмән өлгө булып торһа ла, киләсәктә тормошта үҙ урыныңды табам, тиһәң, үҙ фекерең дә булырға тейеш.

**Айназ:** Минең өсөн әлеге ваҡытта атайым кумир булып тора. Үҙемде ысын башҡорт итеп иҫәпләй алырлыҡ тәрбиә бирә алды ул: бәләкәй саҡта әкиәттәр, ҙурайғас легенда-риүәйәттәр аша донъяны танырға өйрәтте, Башҡортостандың мөғжизәле урындары менән таныштырҙы. Шулай уҡ Әхмәтзәки Вәлидиҙе кумир итеп ҡабул итәм

**Марат:** Мин һигеҙенсе синыфта Әхмәтзәки Вәлидиҙең башҡорт халҡына яҙған хаты буйынса ғилми эш тә эшләгәйнем. Әле беҙ үҫтереүсе, ҡанатландырыусы уҡыу йорттарыбыҙ бар, шуға беҙгә күпкә еңелерәктер, тейем. Беҙҙе Рәми рухы, мөхит үҙе тәрбиәләй, шағир исемен йөрөткән гимназияла уҡыуы үҙе бер бәхет. Элек "Туған тел" шиғырының мәғәнәһен төшөнөп етмәйенсә, һүҙҙәрен генә ятлағанмын икән, хәҙер уны бөтөнләй икенсе төрлө, күңелем аша үткәреп һөйләйем.

**Руслан:** Илһөйәрлекте ниндәйҙер ойошма йәки партия ғына тәрбиәләй алмайҙыр ул. Партия ҡушҡан өсөн генә иленде ярата башлау мөмкин түгел.

**Айназ:** Төрлө кешеләр була бит, араларында ниндәйҙер саҡырыуҙарға ҡалҡып сығырҙай еңелдәре лә күберәк. Икенсе төрлө, көтөү принцибы, тип йөрөтәләр быны. Әммә кеше үҙенсә фекер йөрөтөргә, ил етәкселәренән яҡшы тормош шарттары тыуҙырыуҙы талап итә белергә тейеш.

**▸ Һеҙ барығыҙ ҙа төрлө уңыштарға өлгәшкән уҡыусыларһығыҙ, быйылғы йылдағы иң ҙур еңеүегеҙ тип нимәне иҫәпләйһегеҙ? Еңеүҙәр яулау өсөн нимә этәргес булып тора?**

**Миңлегөл:** Ғәҙәттә, юғары үрҙәр яулау сәме еңеүгә килтерә, унан һуң, минең уңыштарымды күреп, атай-әсәйем ҡыуанһын, тейем.

**Ғәлиә:** Мин әлегә инглиз телен ныҡлап өйрәнәм, шуға ла ошо йүнәлеш буйынса конкурстарҙа ҡатнашам. Дәрестәрҙән һуң Америка-Башҡорт интерколледжында шөғөлләнәм, шулай уҡ башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса олимпиадаларҙа ҡатнашам.

**Руслан:** Теүәл фәндәрҙе үҙ иткәнлектән, үҙемде ошо йүнәлештә үҫтерәм. Лицейҙа сит илдәрҙә үткәрелгән конференцияларҙа ҡатнашырға мөмкинлектәр бирелә, экология буйынса Төркиәлә ойошторолған халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференцияла ҡатнаштым. Химия фәне оҡшай, шуға химия буйынса олимпиадаларҙа ҡатнашам, шулай уҡ башҡорт теленең кәрәклеген яҡшы аңлайым һәм үҙемде үҫтереү өсөн башҡортса әҫәрҙәр уҡыйым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Кемдер Дон Кихотлыҡты ысынбарлыҡ тойғоһоноң булмауы, кешенең хыялдар менән йәшәүенә бәйләп аңлатһа, кемдер өсөн ул тормош прозаһына яраҡлашырға теләмәү, тормошто үҙгәртергә тырышыу, хыялдар хаҡына героик рәүештә алға барыу, юғары маҡсаттарға тоғролоҡ... Һәм тағы ла. Йәш әңгәмәселәребеҙ менән һөйләшкәндән һуң, Дон Кихоттарҙың хәҙерге заманда ла йәшәүенә, уларҙың яңғыҙ булмауына инанаһың.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘҺЕ*

# КӘКҮК ЙОМОРТҠАҺЫ...

## ниңә сит ояла?

**Тәбиғәттең серле тереклектәре бик күп. Беҙҙең төбәктә лә бар улар, тик ниңәлер беҙ уларға иғтибар итмәйбеҙ. Бына ошондай мөғжизәле ҡоштар иҫәбенә кәкүкте лә индереп була.**

Был ҡошто барыбыҙ ҙа белә, дөрөҫөрәге, ишетә. Бына тиҙҙән оҙайлы ҡыш сигенеп, дилбегәне йылы яҙға тотторор. Ап-аҡ ҡайындар әле шыйыҡ япраҡтары менән урманды биҙәй башлаған саҡта "кәк-күк" тигән тауыш уны күпкә йәнләндереп ебәрер. Кәкүк тауышы бигерәк йәмле һәм уны барыбыҙ ҙа тыңларға ярата. Шундай һынамыш та бар: күпме тапҡыр ҡысҡыра кәкүк, шунса йыл ғүмер йәшәләсәк әле. Кәкүк һынауының ундан артығы кәрәкмәй буғай оло кешегә. Быныһы ла етәр, Аллаға шөкөр, йәшәйем икән әле, тип ҡыуанып киткән булалар шунан. Мин дә ҡыуандырайым әле. Кәкүк туҡтамай ғына 360 тапҡыр ҡысҡыра ала икән! Ошолайтып улар үҙҙәренең иштәрен эҙләйҙәр.

Кәкүк әсәнең башы ауыртмай, ти халыҡ мәҡәле. Ә тәбиғәттә хәл икенсерәк. Кәкүк май-июль айҙарында 6-8-ҙән алып 20-25-кә хәтлем йомортҡа һала. Әммә ул үҙ балаһын ҡарап үҫтермәй. Йомортҡаларын сит ояға һалыуҙы хуп күрә. Кәкүктең ошондай насар холҡо барлығын, дөрөҫөрәге, холҡһоҙ икәнен башҡа ҡоштар ҙа белә! Бына, әйтәйек, беҙҙең урмандарҙа 208 төрлө ҡош йәшәй. Шуларҙың 30-ға яҡыны кәкүк балаһын тәрбиәләп үҫтерергә мәжбүр. Сәбәбе лә ябай - улар кәкүк һалған йомортҡаны үҙҙәре һалған йомортҡанан айыра алмай. Ә кәкүктең үҙен танышҙар, уны күреп ҡалыу менән үк ҡыуа башлайҙар. Әммә уныһы, киләсәк быуын хаҡыналыр инде, бындай һөжүмде бик тыныс ҡабул итә. Уларҙың "һүгеүҙәренә-типкесләүҙәренә-әрләүҙәренә" бөтөнләй тиерлек иғтибар итмәй ағас ботағында ултыра бирә. Әрләп ялҡҡан ҡоштар бер аҙҙан уны тынслыҡта ҡалдыра. Тора-бара яйлап үҙ эштәре менән булыша башлайҙар. Кәкүккә шул ғына кәрәк тә. Тик ултырмай ул, шул ултырыуында ҡоштарҙың тормошон өйрәнеп ултыра. Ҡайҙа китәләр, ҡасан ҡайталар, тигәндәй. Кәкүк өсөн иң мөһиме - һалынған йомортҡалар тураһында мәғлүмәт йыйыу. Ниндәй төҫтә улар, ҙурмы-бәләкәйме, оҙонсамы-түңәрәкме, тигәндәй. Ә һөҙөмтә иҫ китмәле! Ҡоштарҙың ниндәйҙер мәлгә үҙ ояһын ташлап китеүе була, шул арала кәкүк шул ояға үҙ йомортҡаһын һалып та өлгөрә. Уға ни бары 10 секунд ваҡыт етә. Алдан мәғлүмәт йыйып ултырыу ҙа бушҡа ғына булмаған икән - кәкүк йомортҡаһы оялағы йомортҡаларҙан төҫө менән дә, формаһы менән дә, ҙурлығы менән дә бөтөнләй тиерлек айырылмай. Шуға күрә буласаҡ "атай-әсәй" кәкүк йомортҡаһын таный алмай ҙа инде. Кәкүктең эше быной менән генә бөтмәй әле. Иҫәп-хисапҡа тура килһен, тип, оялағы бер йомортҡаны суҡышы менән әләктереп алып китә!

Бер заман йомортҡанан кәкүк балаһы килеп сыға. Шулай ҙа ҡайһы бер ҡоштар ят баланы таный һәм шунда уҡ ояны ташлап китә. Әммә күптәр был "зәғифте" ташламай. Ә тере ҡалған кәкүк балаһы үҙен бик сәйер тота. Ул ҡош йомортҡаларын һәм яңы тыуған балаларҙы оянан этеп төшөрә башлай. Шуныһы ҡыҙыҡ (кемгә ҡыҙыҡ, кемгә үлем, тигәндәй) - оянан этеп төшөрөүгә уңайлыраҡ булһын өсөн кәкүк балаһына ваҡытлыса ғына бөкөрө үҫеп сыға. Ҡайһы ваҡыт кәкүк ояға ике йомортҡа һалып китә икән. Әммә бала-кәкүк үҙ туғанын да йәлләп тормай, уны ла оянан алып ташлай. Күп тә үтмәй, ояла кәкүк балаһы яңғыҙы ғына тороп ҡала. Шуныһы ғәжәп: "атай-әсәй" үгәй баланы барыбер ташламай. Оҙаҡламай уныһы уларынан күпкә ҙурайып китә бит әле. Әллә танымайҙар, әллә аңламайҙар, үҙенән әллә күпмегә ҙур кәкүк балаһын ашаталар ҙа ашаталар. Хужа-ҡоштар сит-ят ҡош балаһын шулайтып ашатып- эсереп, "кеше итеп" осороп ебәрәләр.

Ҡоштар белгестәре был ҡоштоң насар ҡылығын ошолай аңлата. Кәкүк башҡа бер ҡош та ашамаған ҡарышлауыҡтарҙы ашап, урманға ҙур файҙа килтерә. Ә бындай аҙыҡ менән ул үҙ балаһын туҡландыра алмай икән. Ашатҡан хәлдә, улары үлер ҙә ҡуйыр ине. Шуға күрә кәкүк йомортҡаһын сит ояға һалырға мәжбүр була.

Тәбиғәттә барыһы ла уйланылған шул.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

***✓ Ниндәйҙер ғилләә арҡаһында Сәғирә ҡарсыҡ ғүмер ахырындағы тормошон, һуңғы тиҫтә йылдарҙағы хәл-ваҡиғаларҙы хәтерләмәй, ә кендек ҡаны тамған Ҡоҙашын, үҫмер сағын иҫләй.***




Ихатала йыш буталмаһын, ирен сығырынан сығармаһын, тип, инәһенә йөн иләргә үә сиратырға, улдарына, ҡыҙҙарына, килендәренә, ҡоҙа-ҡоҙасаларына, ейәнейәнсәрҙәренә ойоҡбаштар бәйләргә ҡушты Ғәбиҙә. Шулай ҡыш буйы йөн менән мәшғүл булды ҡарсыҡ. Май тыуғас, инәһен сирәмгә бәпкә көтөргә әйҙәне.

Инәһенең пенсияһы ҡыҙына көнкүреш кәрәк-ярағы, әйбер-фәлән алырға ярап ҡалды, уйламағанда күктән төшкәндәй тойолдо. Яңы һыуытҡыс, компьютер күптән кәрәк ине. Малайҙарының өҫтөн дә бөтәйтте. Донъя йөгөн ҡатыны иңенә һалған, үҙен хәмер хәстә иткән ире бының менән әллә ни ҡыҙыҡһынманы ла, үгеҙ үлһә - ит, арба ватылһа - утын, тигән ғәҙәтенән арына алманы. Сәғирә ҡарсыҡ ҡына: "Миңә ниңә пенсиямды бирмәйҙәр икән?" - тип, бәләселәне, кәүгәселәне лә, тора-бара уны онотто, һирәк-һаяҡ ҡулъяулығына төрөп йөрөткән тиндәрен генә һанап, күңеленә һиллек тапты.

Бер көн урамдан бәпкә көтөп ингәс, Сәғирә ҡарсыҡ: "Был ауылдыҡылар күрер күҙгә һөмһөҙ, һөймәлекһеҙ икән. Ирҙәре эскесе. Бисәләре йыуан, күбә кеүек," - тип хәбәр һалды. Быны ишетеп, төшөрөп алған Ғәббәстең һарыуы ҡайнаны, ҡатынына:

- Туғандарыңа әйт, инәйеңде алып ҡайтһындар, мин башҡаса ҡарамайым, - тип ҡысҡырҙы.

* * *

Бер айлыҡ йәйге ял мәленә Ғәлиә менән Тәлғәт Сәғирә ҡарсыҡты Урмансынан тыуған ауылына алып ҡайтты. Юлда иномаркаһының радиоалғысын ҡабыҙып ебәрҙе. Башҡортса моңло йыр яңғыраны.

- Машинаң шәп икән, - тине ҡәйнәһе.

- Ҡыҙың бик бәхетле, - тип, уның кәйефен күтәрҙе кейәүе. - Шәп машинала музыка тыңлатып, наҙландырып ҡына йөрөтәм.

Ҡәйнәһе көләмһөрәп ҡуйҙы, әммә кейәүе кеше балаһы булыуҙанмы, афарин, тигәнен ысҡындырманы, һүҙен ситкә борҙо:

- Ай-вай, юлыбыҙ ҡалай оҙон...

Ауылға килеп ингәс, Тәлғәт:

- Таныйһыңмы, ҡәйнәм, был ниндәй ауыл? - тип һораны.

- Ҡоҙаштыр, - тине ҡәйнәһе.

- Ентекләберәк ҡара, һинең илле йыл ғүмереһ ошонда, уның болондарында, тауҙарында, ҡайынлыҡтарында үткән. Ошонда еләк йыйғанһың, бесән сапҡанһың, ураҡ урғанһың... Сырамытмайһыңдамы?

- Нәрәлеме әллә?

- Нәрәле шул. Нәрәле...

Машинанан сыҡҡас, алдында алмағастар, сейәләр үҫеп ултырған өйөн, йәшелгә буялған ҡапҡаһын танып, ихлас ҡыуанды Сәғирә ҡарсыҡ. Теремекләнеп, күҙҙәре баҙлап китте, ҡапыл ғына Әғләмен иҫенә төшөрҙө:

- Минең ҡарт һуғып ултырамы икән?

- Келәмме? - тине Ғәлиә кинәйәләп.

- Араҡы эсеп ултыралыр, тим. - Шуны ла аңламайһыңмы, тигәндәй, инәһе ҡыҙына сәйерһенеп ҡарап ҡуйҙы.

- Инәй, атайым үлгәнгә инде туғыҙ йыл. Һәр йәйҙә хәтер кисәһен үткәрәбеҙ, уға бағышлап аят уҡытабыҙ.

- Эй, меҫкенкәй... Мин үлгәнен белмәй ҙә ҡалғанмын шул.

Ниндәйҙер ғиллә арҡаһында Сәғирә ҡарсыҡ ғүмер ахырындағы тормошон, һуңғы тиҫтә йылдарҙағы хәл-ваҡиғаларҙы хәтерләмәй, ә кендек ҡаны тамған Ҡоҙашын, үҫмер сағын иҫләй, күптән әхирәткә күскән зат-нәҫелен иҫән, тип уйлай. Сәй эскәс, ҡашығаяҡты йыуып, йыйыштырып йөрөгән ҡыҙына, аптырағанда, вай, йырлағанда, вай кем, тип ҡыҫтырғандай, хайран ҡалып өндәште:

- Ғәлиә, минең уҡытыусыма ҡасан кейәүгә сыҡтың? Күптән йәшәйһегеҙме?

- Инәй, һиңә нисә йәш?

- Егерме һигеҙенсе йылғымын. Шунан иҫәплә инде.

- Һин һикһәндән уҙғанһың. Уҡытыусың күптән фани донъянан баҡыйлыҡҡа күскән. Шунан ул минең нисек ирем булһын!

- Ә мин, тинтәк, уҡытыусым, тип ҡыуанып торам. Ҡарт хәтер - тишек иләк шул. Ҡарсыҡ булғансы, хәҙер балсыҡ булыуың хәйерлерәк инде.

Көндәр бик ҡыҙыу торғас, эҫе хәлде алғас, тиргә төшөргәс, Тәлғәттең сауыллыҡ-сауҡалыҡтығы дачаһына күстеләр. Бында - йәшеллек, еләҫ, сәрхәт, барыһы ла һоҡланған, хатта йәннәт, тигән хозурлыҡ. Ихата биләмәһендә ҡайын еләге, ер еләге шау сәскә ата, шунан ҡыҙарып бешә. Өй тирәләй миләш, балан, алма, дунала, армыт, һырғанаҡ, ҡарағат, сейә, әберсә үҫә. Тәлғәт электр ҡөҙрәте менән атылып сыҡҡан һыуҙы ямғыр һымаҡ яуҙырһа, сирәм тағы ла йәшелләнеп китә. Айырыуса ейән-ейәнсәрҙәре уйнап, йомшаҡ үләндә аунап рәхәтләнә. Көн һайын мунса төшәләр, ылыҫ, кесерткән, мәтрүш төнәтмәһе менән ҡойоналар. Йыуындырып, йәш япраҡ менән сабып, таҙа кейем кейҙергәс, Сәғирә ҡарсыҡ: "Аяҡ-ҡулдарың һыҙлауһыҙ, йәнең-тәнең сырхауһыҙ, аҡылың таҙа булһын, йортоңдан ҡот-ырыҫ китмәһен", - тип, ҡыҙына теләк яуҙыра, рәхмәт уҡый.

Ҡарсыҡҡа алсаҡ йөҙ, ҡараш, йылы мөнәсәбәт әйтеп аңлата алмаҫлыҡ һөйөнөс. Балаларының йорто, етеш йәшәүе лә кинәнес. Өйгә инһәң, сихәтле ҡарағай еҫе аңҡып, күңелгә ләззәт бирә. Тәлғәт бүрәнәләрҙе сутлап йунған, йышҡан, мүк ҡойолмаһын өсөн араларын обой елеме шыйыҡсаһына бысҡы онтағы ҡушылған иҙелмә менән шыма итеп һылаған, лаклаған. Бүлмәләрҙе һырлап йышылған ҡалын таҡталар менән бүлгән. Бөтә нәмә тиерлек тәбиғи, ғәҙәти.

Хәтере китһә лә, дәрте китмәгән ҡарсыҡтың. Әшәге, икмәк бешерер урыны, сыуалы булған мейесте әйләнгән һайын ағартырға дәрт итә, өйҙөң йәме мейес менән, тип ебәрә. Кирбес төҫөндәге утҡа сыҙамлы буяу менән буяғас ҡына мейесте аҡлау ниәтенән һүрелде, мәгәр яғыу теләге дөрләне. Йәйге селләлә! Тышҡа сыҡҡан һайын сытыр, тапсыҡ, ҡыҫҡа таҡта-һаҡта индерә. Тәлғәт уны күтәрмәнән кире бороп, утынын ихаталағы сыуал янына һалдыра.Ҡараңғы төшкәс, усаҡ яғып, ялҡынландырып, утҡа бағып һөйләшеп, йырлашып ултыралар.

Тәлғәт Өфөнән ҡан тамырҙарын таҙартыуға, киңәйтеүгә, зиһенде асыуға булышлыҡ иткән дарыуҙар килтергәйне. Аҡ, һары төймәләрен көн һайын йоттора, медпунктҡа алып барып укол да ҡаҙата. Бер көн кискә табан Тәлғәт ҡәйнәһенән:

- Мин кем? - тип һораны.

- Һинме? Еҙнәм...

Тәлғәт, еҙнәң түгел, ә кейәүең, тип раҫлап маташманы, ә уның ыңғайына:

- Әйҙә, балдыҙ, йырлап алайыҡ әле, - тине.

Ҡәйнәһе әүәл һәр мәжлестә оҙон көйҙәрҙе йырлап, ҡунаҡ һыйлай торғайны. Тәлғәт байтағын магнитофонға ла яҙып алды. Хәҙер улар уның хәтеренән юйылған, күрәһең. Әле ул элек ҡыҙы ла, кейәүе лә унан ишетмәгәндәрен йырлап ебәрҙе. Ҡарсыҡтың моңло тауышына әҫәрләнеп, тормошонда тәҡдиренә яҙылғанынан, күрәсәгенән дә күберәк күргәнен, мәгәр бөгөлмәгәнен, һынмағанын кисереп ултырып, Тәлғәттең керпектәре еүешләнде. Эй ҡәйнәм, башыңа төрлө уй төшәме икән хәҙер? Зиһенең асылып киткән мәлдәрҙә төшәлер, күрәһең, төшәлер...

* * *

Йәне бар ҡыбырламай тора алмай икән шул. Иртүк уянып, Сәғирә ҡарсыҡ күтәрмәне һеперҙе, аяҡ кейемдәрен тәртипләп теҙҙе. Һыу индерергә ниәтләгәйне, биҙрәләр тулы булып сыҡты. Инде нишләргә тигәндәй, тирә-яҡҡа ҡаранды һәм тышта утыҙ градустан да ашыу эҫе икәнен иҫкәрмәй, йәнә утын ярҡаларын уң ҡулына һалды, тураям тигәндә артҡа аунап китте. Ҡыҙы яҡынлағанын күреп:

- Бәй, йығылып ятам да, - тигән булды.

- Әйткәнде аңламағас, тәгәрәп ятаһың шул, - тип, Ғәлиә инәһен торғоҙҙо ла соландан йөн сығарып бирҙе.

- Эшһеҙ торалмағасһың, бына һиңә йөн тет, илә, сират, бәйлә.

Әйткәндәй, йөн эше - Сәғирә ҡарсыҡтың иң яратҡан шөғөлө. Ул бәйләгән бәшәйҙәрҙең, бейәләйҙәрҙең, кейемдәрҙең, шәлдәрҙең иҫәбе юҡ. Заманында балаларын да шәл бәйләп һатып уҡытты. Ә һуҡҡан келәмдәре... Күҙҙең яуын алып тора, барыһын да хайран итә, урындыҡтарҙы, дивандарҙы хозурлап тора. Башҡорттоң ғәжәп биҙәге, тип, Тәлғәт кейәүе сағыу келәмдәрен машинаһының ултырғыстарына ябып йөрөтә. Музейға ла алдылар, телевизорҙан да күрһәттеләр күҙ, күңел нурын һалған ҡул эштәрен, сит тарафтарҙан да һорап килделәр.

Тәлғәш ҡайын аҫтына ифрат та йыуан түмәр ҡуйып, өҫтөнә ҡорама һалып, Тәлғәт ҡәйнәһен иплэп кенә шунда ултыртты.

- Бында күләгә, еләҫ, сәскәләр хуш еҫ аңҡыта, ҡоштары сутылдап һайрап тора. Саф һауа һулап, урман моңон тыңлап, үҙең дә көйләп, йөнөңдө илә лә илә әйҙә.

- Йәнемде иретеп ебәрҙең әле, еҙнә. Аҫылташ һыу төбөндә, аҫыл һүҙ күңел төбөндә шул, телең йөрәгемә дарыу булды ла ҡуйҙы.

Тәлғәт кейәүе Сәғирә ҡарсыҡҡа йә уҡытыусыһы, йә еҙнәһе, ҡыҙы Ғәлиә иһә ҡәйнәһе, ҡәйенбикәһе һымаҡ күренә. Әкиәттәрҙә йолҡош ҡына егеттәр һоҡланғыс батырға, ҡыҙҙар өйрәккә, аҡҡошҡа әйләнгән кеүек, балалары, туғандары башҡа затҡа әүерелә. Улы Ғәбит башҡаланан килеп төшкәс, Сәғирә ҡарсыҡ ҡулдарын ҡош ҡанаттарылай һоноп, уға табан алҡынды:

- Йәүҙәт ағаҡайым, ҡайҙан ғына килеп сыҡтың? Ниңә бик оҙаҡ күренмәнең? Еңгәм ҡайҙа? Ҡоҙаш имерме?..

- Инәй, мин бит Йәүҙәт ағайың түгел, улың, Ғәбит улың. Йәүҙәт аҡай күптән зыяратта инде.

- Ләхәүлә... Йә Алла, тәүбә, тәүбә. Белмәй йөрөймен шул ғазраил йәнен алғанын.

Кис еткәс, ҡарсыҡ йәнә хафаға төштө:

- Бөгөн кемгә генә барып ҡунырбыҙ икән? Ғәзимдәргә барайыҡ, индерер, моғайын. Ул беҙҙең зат та баһа.

- Инәй, Ғәзим аҡай - мәрхүм, әллә ҡасан мәрхүм.

- Шулаймы ни?..

Таныш йөҙҙәрҙе күреү, төҫмөрләү ҡасандыр белгәндәрҙе иҫенә төшөрә, буғай. Бала-сағалар, ейән-ейәнсәрҙәр күмәк булып килгәс, Сәғирә ҡарсыҡ ҡунырға кесе улы менән өйөнә ҡайтты. Йоҡлар алдынан улына яғымлы ғына өндәште:

- Әғләметдин, тим, Әғләметдин! Нишләп айырым ятаһың, минең янға ят, бергә йылыраҡ булыр.

- Инәй, мин - һинең улың. Атайым үлгән.

- Ниңә бушты һөйләп тораһың. Һин - Әғләметдин!

- Мин атайыма оҡшағанмын ғына. Ул иҫән булһа, хәҙер уға һикһән һигеҙ йәш тулыр ине. Ә миңә - ҡырҡ биш кенә. Ҡырҡ биш кенә, инәй!

- Йә инде, яңғыҙ башым, юҡ юлдашым. Йә инде... Үлемһеҙ бәндәләй был донъяла мин генә тороп ҡалғанмын икән...

Ҡыҙҙар, кейәүҙәр машиналарында йә тауға, йә һыу буйына, йә магазинға елә. Сәғирә ҡарсыҡ йәнә тыныслығын юғалта, ахырыһы, бер үҙем генә ҡалам тип ҡурҡа:

- Ниңә мине лә ултыртмайҙар, үҙҙәре менән алып китмәйҙәр? Сәпсим урыҫлашып, ҡырыҫайып бөткәндәр, мәлғүндәр.

- Ҡайҙа китмәксеһең, ҡәйнәм? Силәбегәме, Мәскәүгәме, әллә Ҡаф тауғамы? - ти Тәлғәт шаяртып.

- Ҡайҙа инде ул - Мәскәү, Ҡаф тау! Ҡоҙашҡа барһам да бик хуш.

Тәлғәттең ҡыҙы менән кейәүе Өфөгә алып ҡайтырға йәш ҡайын баҫҡан әүәлге иген баҫыуынан багажниктарын тултырып япраҡ килтереп бушатты. Сирәмгә һәр ваҡ ботаҡты рәтләп һалып, миндек бәйләргә керештеләр. Был шөғөлдө күреп, Сәғирә ҡарсыҡ ынйы тапҡандай ҡыуанды, эйелгән килеш ярты сәғәттән ашыу ейәнсәренә булышты. "Нисек биле ауыртмай?" - тип аптыранылар. Япраҡ бәйләү ҡарсыҡтың күңеленә сихри ҡөҙрәт, ғүмеренең күҙ асып йомғандай бер мәленә ғәжәйеп тынлыҡ бирҙе.

**(Дауамы бар).**

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




## Ҡүҙ-ҡолаҡ бул...

Шаянлығы менән дан ҡаҙанған бер егет ҡатынын ауылдағы бала табыу пунктына килтергән дә, уны табиптарға тапшырғас, сығып барышлай, дауахананың ишеге алдында Айҙар ағайҙы осратҡан. Хәл-әхүәл һорашҡас, теге егет ағайыбыҙға бер үтенесе барлығын белдергән. "Ниндәй үтенес ул?" - тигән һорауға: "Ҡатынды бала табыу йортона алып килгәйнем, ҡараңҡырап тор әле", - тигән атай була торған кеше. Ихлас ағайыбыҙ: "Ярай һуң, мин бушмын, ни эшләргә белмәйем барыбер", - тип ризалашҡан. Теге егет: "Ҡүҙ-ҡолаҡ бул инде, ағай, һыйыр һымаҡ, балаһының яҡтылығын ашап ҡуймаһын", - тип өҫтәп ҡуйғас, Айҙар ағай егеттең шаяртҡанын белеп ҡалып, дауахананы ике уратып баҫтырған, тиҙәр.

## Бер шаянға - ике шаян...

Теге шаян егеттең ҡатынының икенсегә бала табыу ваҡыты еткән. Был юлы, ауылдағы бала табыу йорто ябылыу сәбәпле, ҡатынын район дауаханаһына "Тиҙ ярҙам" менән алып киткәндәр. Үҙенең атай булыуы тураһындағы хәбәрҙе ишетеп, шаян егетебеҙ машинаһы менән елдергән район үҙәгенә. Барып инһә, бала табыу йортондағы шәфҡәт туташтары бер тауыштан тиерлек: "Ниңә ҡотоң алынған, борсолма, ҡатының бала яткылығын ашаманы, үҙебеҙ ҡарап торҙоҡ", - тигәндәр. "Һеҙ был турала ҡайҙан беләһегеҙ?" - тип, күҙҙәре маңлайына менгән егеттең. "Беҙ барыһын да беләбеҙ!" - булған яуап. Баҡһаң, шаян егеттең үҙен шаяртмаҡсы булып, "Тиҙ ярҙам" водителе Әскәт шәфҡәт туташтарының ҡолағына сыбырҙаған булған икән. Шулай, беҙҙең ауылда бер шаянға ике-өс тағы ла шаянраҡ кеше тура килә.

**Әхәт ИШБУЛАТОВ.**
**Баймаҡ районы.**

## "Солянка"

Был хәл 30-40 йылдар самаһы элек булған. Йәйҙең йәмле бер көнөндә ауыл өйө соланының мөйөшөндә бер инәй аш-һыу менән булыша икән. Солан ҡараңғыраҡ булған, шуға күрә инәй ишектән килеп инеүсе ҡәйнешен аңғармаған. Гел ҡыҙыҡ әҙләп йөрөүсе ҡәйнеше ипләп кенә камзулы яурынынан тотоп, еңгәһен үҙенә табан борған да "Привет!" ти икән. Ҡото осҡан инәй "Солянка!" тигән була, ти. "Салют!" тип әйтергә теләгән икән. Ошо ваҡиғанан һуң ул инәйҙең балаларына, ейән-ейәнсәрҙәре әле булһа осрашҡанда бер-беренән "Солянка!" тип сәләмләй.

## "Упал с самолета"

Дауахана хеҙмәткәрҙәренең эше ауыр булыу менән бер рәттән, ҡыҙыҡлы хәлдәр ҙә йыш булып тора. Ошондай хәлдәрҙең береһен Әбйәлил яҡтарында әле булһа телдән төшөрмәй һөйләйҙәр.

Был яҡтар дельтаплан менән шөғөлләнеүселәрҙең яратҡан төбәге. Бындай хәүефле шөғөлдән зыян күреүселәр ҙә байтаҡ. Көндәрҙең береһендә "Тиҙ ярҙам" машинаһы дауаханаға дельтаплан менән осҡанда ҡолап, аяғын һындырған спортсыны алып килә. Тиҙ ярҙам машинаһында килеүселәрҙе, тәү сиратта, дауахана хеҙмәткәре "Имгәнеү журналы"нда теркәргә тейеш икән. Был көндә дежурҙа булыусы шәфҡәт туташы дельтапландың нисек аталыуын һәм спортсының нимәнән ҡолауын иҫенә төшөрә алмай, бик оҙаҡ аҙапланғандан һуң: "Упал с самолета", - тип теркәп ҡуйған, ти.

## "Мәскәүгә барыусы трамвай"

Башҡа ҡалала нисектер, әммә Өфөлә халыҡ трамвай хеҙмәте менән күп ҡуллана, сөнки иртәнге тығындарҙа эш урынына барыу ҙа, кисен өйгә ҡайтыу ҙа оҙаҡ ваҡытты алмай. Шулай бер көн трамвайҙа китеп барыш. Красин туҡталышынан инде ҡуҙғалып киттем тигәндә, трамвай водителе ух та пых килеп йүгереүсе әбекәйҙе күреп, көтөп торорға ҡарар итте. Күҙе тоноп килгән әбей трамвай номерын ҡарарға оноҡҡан, күрәһең, баҫҡыстың берәүһенә күтәрелгәс: "Трамвай ҡайҙа бара?"- тип һораны. Алда һөйләшеп торған егеттәрҙең береһе, башын бормай ғына: "Мәскәүгә", - тине лә, дуҫы менән артабан әңгәмәһен дауам итте. Башҡа пассажирҙар ул-был иткәнсе: "Уй, минең трамвай түгел бит был!" - тип әбей кире төшөп китте. Ишектәр ябылды, трамвай ҡуҙғалып китте. Бер-нисә секундтан трамвай эсен дәррәү көлөү тауышы күмде.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА.**

## Ошондай болт кәрәк

Колхозда сәсеү осоронoң гөрләп торған сағы. Күрше бригаданан механик келәт мөдире менән телефондан бик ҡыҙыу һөйләшә, аҙаҡтан: "Бына ошо ҙурлыҡтағы болт кәрәк ине", - тип телефонға ымлап күрһәтә. Эргәһендәгеләр көлә, йәнәһе, телефондан күренәме. Быны механик Исхак үҙе лә аңлап ҡала һәм һыны ҡатып көлә башлай. Беҙҙең яҡта әле лә берәйһе телефондан һөйләшеп торһа, болт һорайһыңмы, тип мәрәкәләйҙәр. Ә Исхаҡҡа "шундай болт" тигән ҡушамат тағылды ла ҡуйҙы. Эш өсөн янып йөрөгәнгә бирелгән ҡушаматҡа үпкәләмәне былай.

## Ирен аҡылға ултыртты

Миңнулла бик ҡыҙыу кеше, ә уны ҡыҙҙырып ебәргәне әлеге шул хәмер инде. Шулай бер тапҡыр эскәнендә ҡатынын һуҡҡыслап ала был. Икенсе эсеүенә ҡатыны күрше ҡатынды алып инә, йәнәһе, тегеһе яҡлаша була инде. Миңнулла ысынлап та күршеһенән ояла һәм оялышынан аҫылынырға булып китә. Күрше ҡатыны һәм бисәһенә уны был уйынан дүндереү өсөн байтаҡ ҡына инәлергә һәм аҡылға ултыртырға тура килә. Хәбәр ни, ауылға тиҙ таралды. Эсеп йөрөгәндәргә әле лә, аҡылға ултыртмайҙармы әле, тип һорайҙар. Уйламай эшләһәң, күҙ сығараһың, тигәне ошо инде.

## Һелтәүесең нисек?

Ауылда егәрлеге менән даны сыҡҡан Нурулла ағай йәшәне. Әммә үҙе "төшөргөләп" тә ала ине. "Аҙыраҡ һелтәнем, һелтәүесем шәп әле", - тип, шыттырып та ебәрә икән. Уның менән, һаумы, тип түгел, ә һелтәүесең эшләйме, тип кенә иҫәнләшәләр. Ағай ҡартайҙы, хәҙер эсмәй ҙә. Әммә унан һаман, һелтәүесең ни хәл, тип хәлен һорашалар. Бер һүҙҙә күпме мәғәнә - эше лә, эскеһе лә, хәл белешеү ҙә.

## Эскенәйем, үҫһәңсе...

Һимеҙ Ғәли менән ябыҡ Ғәли ут күршеләр ине. Һимеҙе бер дүрткел шкаф кеүек йыуан, саҡ тын ала. Йәйләп булһа ла тауға менеп төшә, һәр саҡ ҡыбырлап йөрөй, нәҙегәйергә хыяллана, аҙ ашай. Ябығы һап-һау, алдына килгән бер ризыҡты йыпыра ғына, йүгереп йөрөй, егәрле, һимерергә хыяллана. Ябыҡ Ғәлиҙән иптәштәре, үтә күренәһең бит, ашағаның ҡайҙа китә, тип көлә. Меҫкен ғәрләнә, ояла. Шулай бер көн көлдөгән сисеп, көҙгө алдына баҫа ла: "Эй, эскенәйем, ҡасан үҫәһең, ҡасан мин дә һимерәм инде?"- тип эсенең тиреһен тартҡылай икән. Йомошҡа ингән һимеҙе быны шым ғына ҡарап торған да, сығып тайған. Сыҡҡан да урамдағы ирҙәргә һөйләп көлдөргән. Һүҙ ни, тәғәрмәс, ауыл буйлап тәгәрләгән. Хәҙер меҫкен Ғәлиҙең күҙен дә астырмай, "Эскенәйең үҫәме?" тип көләләр. Һимеҙ Ғәли иһә мыйыҡ аҫтынан ғына көлә. Йылдар үтте, барыбер икеһе лә үҙгәрмәне, береһе һимеҙ, икенсеһе ябыҡ көйө үлделәр, маҡсаттарына ирешә алманылар. Әле лә һирәк-һаяҡ ябыҡтар күренһә лә, һимеҙҙәр осраһа ла, шул икәүҙе иҫләп көлөшәләр. Күрмәгәндең — күргеһе, күргәндең ҡоҫҡоһо килә, тигәнең шул икәү өсөн генә әйтелгәнме ни...

## Үҙегеҙ сей урыҫ икән

Беҙҙең ауылда Степан ағай тирмәнсе булып эшләне. Башҡортса ла, татарса ла яҡшы һөйләште. Бер көндә ике башҡорт ире тирмәндең ишеген яңынан эшләп ҡуйырға була. Таҡталар ҡағылған арҡыры ағастың башҡортса нисек аталғанын белмәй былар. Үҙҙәре:"Урыҫ Степан ҡайҙан белһен, сей урыҫ бит", - тип һөйләнәләр, ти. Шул саҡ Степан ағай:"Һеҙ үҙегеҙ "сей урыҫ", ул ағас "епһә" тип атала, башҡорт ағайҙар", - тимәһенме. Ағайҙар ҙа, Степан да көлөшәләр. Күп тел белеү зыян итмәй шул.

## Ҡибла, тиме шул...

Мораҡтан элекке күршебеҙ Петр бабай, бейә һатып алырға, тип, беҙҙең яҡтарға килеп сыҡты. Ағайымдар менән урыҫса һөйләшә. "Кобыла нужна", тигәндер инде был. Уларҙың һөйләшкәне ҡолағына инеп ҡалып, өләсәйем ҡустыларыма ҡарап шулай ти: "Кибла, тиме шул? Улайһа, Питер мосолманға әйләнгән бит". Рәхәтләнеп көлгәйнек уның һүҙҙәренән. Әлеге шул тел белмәү инде: йә шатландыра, йә яндыра.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы.**

---

ШАЯРЫУДИЯ



## ЭҘӘРМӘН

*Асылмаған сер һин,*
*Киселмәгән даръя,*
*Һүтелмәгән серҙәр йомғағы.*
*Асҡым килә һине, сискем килә,*
*Моңдарыңа килә уралғым.*
*Аптырама: асып, сисеп бөтһәс,*
*Эҙләп китһәм яңы сер илен.*
*Эҙәрмән мин, тыныс йәшәр өсөн*
*Асыштарға мохтаж күңелем.*

***Дамир Шәрәфетдинов.***

Киселмәгән дарья инең миңә,
Сәпсим асылмаған сер инең.
Яттан беләм һине, таныш миңә
Хатта тәнеңдәге һәр миңең.
Аптырама: һүтеп-тетеп бөткәс,
Эҙләп китһәм яңы сер илен.
Эҙәрмән мин, яңы серҙәр асһам,
Дәрт-дарманым китә терелеп.
Эттәй тоғромон мин эҙләнеүгә,
Һәр яратҡан һуна өйрәктәй.
Анатомияңды яттан беләм,
Психологияң миңә кәрәкмәй.

## ..НДӘЙ

*Бысҡының тешен үткерләһәң,*
*Рәхәтләнеп киткәндәй;*
*Ҡоҙоҡто таҙартып китһәң -*
*Ҡоҙоҡ рәхмәт әйткәндәй.*
*Бысҡының үтмәҫләнгәнең,*
*Ҡоҙоҡтоң үңеҙләнгәнен*
*Күрә бел,*
*Йөрәмә күҙле букәндәй.*

***Буранбай Исҡужин.***

Машинаның майын алыштырһаң -
Машина рәхмәт әйткәндәй;
Ҡатын-ҡыҙҙың сәсен һыйпаһаң,
Рәхәтләнеп киткәндәй
Машинаның майы шыйығайғанын,
Ҡатын-ҡыҙҙың наҙға сарсағанын
Күрә бел,
Йөрәмә күҙле букәндәй.

## ОСТАЗ

*Үҙ-үҙемдең генә остазы мин...*
*Бүтәндәргә һабаҡ бирмәйем мин,*
*Ул ҡәҙәр мин түгел аҡыллы...*

***Таңһылыу Ҡарамышева.***

Тарамыштың ныҡ бит һинең,
Ҡарамышева апай.
Йәп-йәш шағирәләр һине
Кем тип кенә атамай.
Уларҙың бит үҫмер сағы,
Ауан-дыуамал сағы.
Рифма, ритм, образдарҙы
Таба-табалмаҫ сағы.
Ыуыҙ япраҡ һымаҡ ҡына
Иҙелер иләҫ сағы.
Форточканан илһам ҡошо
Инер йә инмәҫ сағы.
Шонҡар итеп сөй шуларҙы,
Өлкәнәйҙем, тип әйтмә.
Үҙ-үҙеңә остаз булып
Фатирыңда тик ятма.

## ЫСЛАНСЫ

*Бер яғымда нәжес,*
*Бер яғымда сәскә,*
*Мин - кем?*

***Илдус Фазлетдинов.***

Аҡлан буйлап китеп барһам,
Ҡыуана-ҡыуана һәр эшкә.
Өп-өр яңы ыслансымды
Буяттым бит нәжескә.
Ах, инәндең слансыһы, тип
Әрләнем туристарҙы.
Ошондай гүзәл төбәккә
Иң һалған шул "дуҫ"тарҙы.
Ҡайнап киттем, дөрләп киттем
Нәфрәттең уттарында.
Танауымды баҫып торам
Мин аҡлан уртаһында.
Уң яғымда күбәләктәр,
Һулымда - рәшә себен.
Мин кем - шуны белеп булмай,
Әйтегеҙсе сәбәбен?

**Фәнил ӘБДЕЛМӘНОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҒИЛЕМ ЭЙӘҺЕ ҺӘМ...

## батша нисек йоҡлай?

■ Психологтар фекеренсә, ниндәй ҡиәфәттә йоҡлауына ҡарап, кешенең характер үҙенсәлектәрен, ҡурҡыуҙарын һәм теләктәрен асыҡларға була. Яралғы кеүек йомарланып йоҡлаусыларға наҙ һәм йылылыҡ етешмәй. Үҙ-үҙенә ныҡ ышанған һәм иғтибар үҙәгендә булырға яратҡан кешеләр арҡаһында йоҡлай. Эстәренә ятып йоҡлаусыларҙың хәтере тиҙ генә ҡалып барыусан, улар һәр ваҡыт ни тураһындалыр борсолоп йәшәй. Ҡабырғаһында йоҡларға яратыусылар тормошҡа тиҙ яраҡлаша белә. Уң ҡабырғаһында йоҡлаусының умыртҡа бағанаһына ауырлыҡ тигеҙ төшә, йөрәккә лә һәйбәт, тән дә ял итә. Һул ҡабырғала, ғалимдар фекеренсә, ижади шәхестәр йоҡлай. Улар башҡалар менән тиҙ уртаҡ тел таба, йәмғиәттәге урындары ла ышаныслы.

■ Яҡшы кәйеф һыуыҡ тейеүҙән һаҡлай. Дуҫтарың менән күңел асҡан, яратҡан эшең менән шөғөлләнгән, башҡөлләй эшкә сумған саҡта һин үҙеңдең иммун системаңды ике көнгә етерлек итеп нығытаһың. Ә насар кәйефтән һуң иммунитет ике тәүлеккә ҡаҡшай. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, һау кеше насар кәйефтә урамға сыҡһа, шунда уҡ һыуыҡ тейҙереп, ауырып китә ала.

■ Кеше олоғайған һайын һөйәктәр кальций етешмәү арҡаһында муртҡа әйләнә, йомшара башлай һәм остеопороз барлыҡҡа килә. Күбеһенсә уның менән ҡатын-ҡыҙҙар яфалана, сөнки улар 35 йәштән һуң һөйәк массаһының йылына яҡынса 1 процентын юғалта. Менопаузанан һуң был юғалтыу икеләтә арта, ә тәмәке тартыу һәм спиртлы эсемлектәр ҡулланыу организмдың тағы ла нығыраҡ ҡаҡшауына килтерә. Был сирҙән һаҡланыу өсөн һөт аҙыҡтарын йыш ҡулланырға кәрәк (татлы йогурттар һәм туңдырма һаналмай). Кальций сөтләүектәрҙә, көнбағышта, минераль һыуҙа, балыҡта күп. Организмда кальций үҙләштерелһен өсөн етерлек кимәлдә D витамины һәм магний булырға тейеш.

■ АҠШ-ның Кеше геномы милли тикшеренеү институты ғалимдары кеше тәненең ҡайһы өлөшөндә бактериялар күберәк икәнлеген асыҡлаған. Тикшереүҙә үҙ ирке менән ҡатнашыусылар бер аҙна буйы бер төрлө генә һабын менән йыуынған. Һуңынан улар бер тәүлек буйы бөтөнләй йыуынмаған һәм ғалимдар уларҙың тәненең төрлө өлөшөнән ягынты алған. Асыҡланыуынса, кеше тәнендә, ашҡаҙан-эсәк трактындағы кеүек, 1 мең самаһы төрлө бактерия йәшәй. Бактериялар беләктә күберәк (44 төрлө) табылған, ғалимдар фекеренсә, ҡулдарҙы тейешле итеп йыуыу беләктәрҙең дә бысраныуына килтерә һәм унда төрлө бактериялар йыйыла.

■ Тәбиғи яҡтылыҡ етешмәүе, аҙ хәрәкәтләнеү, дөрөҫ туҡланмау кеүек үк, һаулыҡҡа ҙур зыян килтерә. Ҡояш нурҙары аҫтында йышыраҡ йөрөһәң, матдәләр алышыныуы, аш һеңдереү яҡшыра, организмда һөйәк системаһы, остеопороз, кариес, йөрәк һәм йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен булдырмаусы D витамины барлыҡҡа килә. Инглиз ғалимдары D витамины етешмәүе тиҙ ҡартайыуға килтерә, тип иҫбатлай. Улар фекеренсә, D витамины дефициты һәр өсөнсө кешелә бар. Был витаминды "ҡояш витамины" тип йөрөтәләр, сөнки организм уның 90 процентын ҡояш тәьҫиренән ала. Шуға ла ҡояш аҫтында йышыраҡ булырға һәм D витаминына бай аҙыҡ-түлек ашарға (балыҡ, йомортҡа, һөт аҙыҡтары) тырышырға кәрәк.

ТҮҢӘРӘК ҠОР

**Ваҡыт һыу кеүек аға, тигәндәре дөрөҫ икәнлегенә һәм кем үҙе шаһит: кисә генә индустриялаштырыу быуатында йәшәй инек, бөгөн иһә донъяла мәғлүмәт быуаты хөкөм һөрә. Ә кем мәғлүмәткә эйә - ул донъя менән хакимлыҡ итә, тиҙәр. Бөгөн, ысынлап та, бар донъя, бар халыҡ мәғлүмәт селтәрендә генә йәшәгән кеүек: ниндәйҙер һорауға яуап эҙләйһең, кемделер табырға теләйһең икән - интернеттың эҙләү системаһына ғына инергә кәрәк. Хатта ер сиге, ер башындағы таныштарың аша ла скайп тигән ҡулайлама аша ғына һөйләшеп аралашырға мөмкин. Был мәғлүмәт быуаты хатта ололарҙы ла битараф ҡалдырманы, улар "Халыҡ университеты" тип аталған проект буйынса махсус рәүештә компьютерҙа эшләргә, интернетты байҡарға өйрәнә. Бәғзеләр милләткә, халҡына аҙ ғына булһа ла ярҙам итеү, башҡорт тигән халыҡ барлығын бөтә донъяға таныштырыу йүнәлешендәге эшмәкәрлек алып бара. Күптән түгел Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Мәғлүмәт сәйәсәте комиссияһы "Башҡортостан Республикаһының асыҡ дәүләт һәм граждандар йәмғиәте төҙөү юлында мәғлүмәт интернет-ресурстарын үҫтереү" темаһына түңәрәк ҡор үткәрҙе. Көн тәртибенә интернет киңлегендәге милли сайттарға нисек итеп рух өҫтәү, рух һалыу мәсьәләләре сығарылды. Был йәһәттән, милли мәнфәғәт күҙлегенән сығып ҡарағанда, бөгөн глобаль селтәрҙә мөһим урынды Башҡорт Википедияһы алып тора. Әйҙәгеҙ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты вәкилдәре, милли баҫмалар баш мөхәррирҙәре, интернетта һыуҙағы балыҡ кеүек йөҙгән вэб-администраторҙар ҡатнашлығындағы түңәрәк ҡор ултырышындағы фекерҙәргә ҡолаҡ һалайыҡ.**

# МӘҒЛҮМӘТЛЕЛӘР...

## донъя менән хакимлыҡ итә

**Гөлфиә Янбаева:** Бөгөн йәштәребеҙҙе, балаларыбыҙҙы интернеттан айырып алып булмаясаҡ икән, тимәк, беҙ унда рух ташларға, рух өҫтәргә тейешбеҙ. Ошо маҡсатты нисегерәк тормошҡа ашырып була? Ғөмүмән, был мөмкин булған эшме? Беҙ "Киске Өфө" гәзите блогы булдырғас, уға аҡыллы һорауҙар сығарып, халыҡты аҡыллы итеп фекер алышыуға саҡыра башланыҡ. Әммә тиҙҙән шул асыҡланды: интернетҡа аҡыллы итеп фекер алышырға инмәйҙәр икән дәһә. Бөгөн милли интернет ресурстары, уларҙың үҫеше, был эште нисек ойоштороу тураһында фекер алышыу менән бер рәттән, йәштәребеҙҙе нисек аҡыллы һүҙгә, рухҡа йәлеп итеү тураһында ла һөйләшергә тейешбеҙҙер, тием.

**Азамат Юлдашбаев:** Был интернеттағы бигерәк тә беҙҙең милләттәштәр өсөн уникаль күренеш: етди тема булһа, өндәшмәйҙәр, юҡ ҡына тема ҡүтәр, тауыҡҡа ем һипкән кеүек, эләктереп алып, сәйнәй башлайҙар. Интернетта ысынлап та етди темаларға бөтөнләй битарафлыҡ һәм ғәмһеҙлек күҙәтелә. Бәлки, беҙҙең милли менталитет та ҡамасаулайҙыр бында. Бөгөн интернет киңлекте, интернет яҫылыкты бүлешеү һәм яулау күренеше бара икән, ошо осорҙа интернет менән дуҫ милләттәштәребеҙҙең күңелен, рухын яулап алып ҡалмаһаҡ, уларҙың бөтөнләй икенсе юҫыҡҡа күсеү ҡурҡынысы бар. Шул күҙлектән сығып ҡарағанда, мин һүҙҙе иң етди темаларҙың береһенән - Башҡорт Википедияһынан башлар инем. Сөнки Башҡорт Википедияһын булдырыу бөгөн заруратан тыуған проблемаларҙың береһе. Әммә күбебеҙ Википедия тураһында бөтөнләй хәбәрҙар түгелбеҙ.

**Рәстәм Нуриев:** Февраль-март айҙарында Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың хәтер кисәләре үтте. Бөгөн ул иҫән булһа, беҙҙең башҡорт теле, башҡорт халҡы өсөн эшләгән эштәребеҙгә, ҡылыҡтарыбыҙға ниндәйерәк баһа бирер, ниндәй йүнәлеш күрһәтер ине икән, тип уйлайым йыш ҡына. Был һорауға яуапты Рәмиҙең замандашы, шулай уҡ халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың шиғыр юлдары - Википедияның девизы менән ҡайтарғым килә:

*Кәрәк түгел милләтем тип*
*тамаҡ ярыу,*



*Кәрәк бары милләт өсөн*
*юлдар ярыу,*
*Кәрәк бары көн-төн тимәй*
*алға барыу,*
*Берләшегеҙ,*
*бөтөн донъя башҡорттары!*

Бөгөнгө беҙҙең һөйләшеү милләт өсөн юлдар ярыу йүнәлешендәге тәүге аҙымдарҙың береһелер ул. Күп осраҡта, интернет селтәрендә башҡорт телендәге сайттар бик аҙ, тигән фекерҙәр ҙә йөрөй. Миненсә, уларҙы пропагандалау етешмәй. Әгәр булған башҡорт сайттарын күрһәтеп, уларҙы пропагандалау эшен киң йәйелдерһәк, башҡорт телендәге сайттарыбыҙ тағы ла күбәйер ине.

Башҡорт Википедияһы сайтына апрелдә 6 йыл тула, ул донъя күләмендә танылыу тапты ла инде. 20-21 апрелдә Ҡаҙағстанда төрки телле википедияларҙың конференцияһы була, унда Башҡорт Википедияһы вәкилдәре лә саҡырылды. Беҙгә Финляндиянан, Монголиянан, Ҡаҙағстандан ярҙам итеүселәр күп. Шул уҡ ваҡытта үҙебеҙҙең башҡорттар бындай сайт барлығын бигүк белеп бөтмәй. Сөнки мәғлүмәт юҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, Башҡорт Википедияһы үҙаллы тыуҙы, үҙаллы аяҡҡа баҫты һәм бөгөн "йүгереп йөрөй". Рәсәйҙә ил халыҡтары телдәре бүлеге исемлегендә - икенсе, донъя исемлегендә - 95-се, төрки телле бүлектәр араһында Төркиә, Ҡаҙағстан, Әзербайжандан ҡала дүртенсе урында килә. Ләкин ул бөгөн дә ярҙамға мохтаж һәм киң мәғлүмәт сараларына асыҡ итеп ярҙам һорап мөрәжәғәт итәбеҙ. Әлегәсә иламай, ҡысҡырмай, бер тауышһыҙ эш башҡарҙыҡ. Башлап ебәргән саҡта "Йәшлек" гәзите, "Мәскәү башҡорттары" сайты ярҙам итте, 2010 йылда бер мең кимәлен үткән саҡта "Шоңҡар" журналы мәғлүмәт ярҙамы күрһәтте. Алты йыл эсендә 5 мең ҡатнашыусы теркәлеп, ниндәйҙер эҙ ҡалдырҙы. Шул уҡ ваҡытта бөгөн иң әүҙем ҡатнашыусылар өсәү - Зөфәр Сәлихов, Азат Хәлилов, Ырымбурҙан Вячеслав Чернев. Черневтың ниндәй милләттән икәнен әйтә алмайым, әммә ул башҡорт телен белә һәм башҡорт телен үҫтереүгә, интернетта пропагандалауға үҙ өлөшөн индерә. Яңы ҡатнашыусылар килә. Шуларҙың береһе - Гүзәл Ситдиҡова.

Донъя кимәлендә Википедияның, Викимедианың бик күп төрлө: Викиһүҙлек, Викиөҙөмтә, Викикитап - уңға яҡын инкубатор-проекты бар. Әлегә тик Википедия ғына үҫешкән, шул уҡ ваҡытта Викикитап, Викиһүҙлек, Викисығанаҡ тыуып килә, ә башҡа төрлө википроекттар тураһында әле хыялланырға ғына ҡала, сөнки әүҙем ҡатнашыусылар юҡ. Викияныҡлыҡтарҙы ғына алғанда ла, донъя кимәлендә әлеге көндә 19 илдә 19 телдә телге ҡурсалаусы, телде үҫтереүсе айырым викифондтар булдырылған. Ул ҡаҙаҡтарҙа ла бар, викибилим тип атала һәм Ҡаҙағстан хөкүмәтенең ҡурсыуына алынған. Фонд президенты булып хатта хөкүмәт вәкиле тора.



ВикипедиЯ
*Ирекле энциклопедия*

Ә беҙ Ҡаҙағстанда үтәсәк конференцияға вәкилдәр ебәреү мәсьәләһен дә хәл итә алмайбыҙ. Сөнки конференция үткәреүсе яҡ ике кешене генә үҙ иҫәбенә ҡабул итә, беҙгә тағы өс кешенең барыуын финанслау юлдарын табырға кәрәк. Быны үҙағыышына ҡуйырға ярамай. Башҡорт Википедияны ойошма булмаған, делегация ебәреү мәсьәләһе лә ҙур проблема булып тора. Бынан инде икенсе мәсьәлә тыуа: бөгөнгө көндө берҙәм ойошма кәрәк. Делегацияны мотлаҡ конференцияла ҡатнаштырыу юлдарын табыу зарур һәм дә уның төп маҡсаты ҡурсалаусы, үҫтереүсе фондтың эшен ҡарап, өйрәнеп ҡайтыу булырға тейеш.

**Вәлиәхмәт Бәҙретдинов:** Килешәм, проект бик ҙур һәм глобаль. Ә уны бары тик энтузиастар ғына тормошҡа ашыра. Ул йәмәғәт ойошмаларының, журналистарҙың ғына түгел, ә дәүләт органдарының да ярҙамын һәм теләктәшлеген талап итә һәм быға өлгәшеү юлдарын эҙләргә кәрәк.

**Гүзәл Ситдиҡова:** Википедия - ул виртуаль энциклопедия, тип әйтергә лә була. Яҡтылыҡ юҡ, тип зарланып йөрөгәнсе, үҙең майшәм яндыр, тигәндәй, Википедияға һәр зыялы милләттәш инеп, үҙе тураһында мәғлүмәт кенә ҡалдырһа ла беҙ ни тиклем ҙур байлыҡҡа эйә буласаҡбыҙ. Интернетта эшләп ултырған кешеләребеҙ әллә ни күп түгел. Ябай кеше унда инеп, мәҡәлә яҙып, махсус рәүештә эҙләнеп ултырмай. Был - энтузиастарҙың эше. Шуға күрә беҙгә киң мәғлүмәт сараларында аңлатыу алып барырға, Википедияла эшләргә өйрәтергә кәрәк.

Мине Википедияла эшләргә Ырымбурҙан Вячеслав Чернев өйрәтте. 10-ға яҡын тел белә. Башҡортса матур итеп яҙа. Башҡортсаҡытайса һүҙлек асты. Шул бала сабырлыҡ менән минә һәр бер хатамды күрһәтеп, төҙәтеп, шулай яҙырға кәрәк, апай, тип өйрәтеп ултыра. Мин үҙем башҡортса-монголса һүҙлеккә 400-ҙән ашыу һүҙ яҙҙым. Был филологтар өсөн дә бик кәрәкле тип уйлайым. Ошо һүҙҙәр араһында ла башҡорт теле менән уртаҡлығы булған бик күп һүҙҙәр таптым.

Һан артынан да ҡыуыу кәрәкмәйҙер, тием. Һигеҙ һыйыр аҫыраһансы, һимеҙ һыйыр аҫыра, тиҙәр бит. Һәр кемдең дә сайт эшләп, унда кешеләргә ылыҡтырырға көсөнән килмәй. Бәлки, беҙгә үҙ-ара һөйләшеп, кем ҡайһы сайтта эшләй ала икәнен билдәләргә кәрәктер? Бына "Бәйләнештә" сайтында мин "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы" һәм "Балалар өсөн әкиәттәр" тигән ике төркөмдө алып барам. Стәрлетамаҡтан студент егеттәр "Шәп шыттырабыҙ" тигән төркөм асты. Улар яҙған юморҙы йыйылып ятып уҡыйҙар, карикатуралары бик ҡыҙыҡ. Асылыуҙарына айҙан саҡ ҡына күберәк, сайтҡа инеүселәр һаны 10 мең кешенән артып китте. Ундай төркөмдәр бар ул, йәштәрҙең талаптарына, уларҙың менталитетына тап килерлек башҡортса төркөмдәр булыуы бик яҡшы. "Башҡортса статустар" тигән, шулай уҡ Рәми Ғарипов ижады буйынса төркөмдәр барлыҡҡа килде.

Беҙгә рус телендәге Википедияны ла күҙ унынан ысҡындырырға ярамай, сөнки ундағы егеттәр ҙә энтузиазм менән генә эшләйҙәр, уларға бер кем дә түләмәй. Беҙ яҙып сыҡҡан мәҡәләләрҙе шунда уҡ татар ҡәрҙәштәр үҙгәртә башлай. Тевкелев тураһында яҙылған мәҡәләне генә лә нисә тапҡыр үҙгәрттеләр. Шуның өсөн Википедияны яҡлаулы итеү тураһында ла һүҙ алып барырға тейешбеҙ. Йөктө тартыусы егеттәребеҙгә Хөкүмәт тарафынан да ниндәйҙер ярҙам күрһәтелергә тейеш. Һис шикһеҙ, дәүләт тарафынан ярҙам да, контроль дә кәрәк.

**Вәлиәхмәт Бәҙретдинов:** Рөстәм Нуриев, төрки телле дәүләттәрҙең Википедияһын үҫтереү фондтары бар, хатта Ҡаҙағстанда уның президенты - дәүләт эшмәкәре, тип әйтеп үтте. Ни эшләп беҙҙең Википедияға ҡарата ла шундай мөнәсәбәт һәм ярҙам талап итмәҫкә?

**Рөстәм Нуриев:** Дәүләт вәкилдәре лә, вуз етәкселәре лә был проблеманы белмәҫкә һәм аңламаҫҡа мөмкин. Шуға күрә иң тәүге бурыс - интернет-ресурстарҙы файҙаланып, аңлатыу эше алып барыу.

**Азамат Юлдашбаев:** Википедия - йәмәғәт башланғысындағы проект һәм ул артабан да йәмәғәтселек башланғысында дауам итергә тейеш. Йәмәғәт башланғысындағы эшкә бер кем дә аҡса бирмәйәсәк. Әммә ниндәйҙер фонд ойоштороп, уны рәсми теркәп, уға финанс юллау тураһында һүҙ алып бара алабыҙ. Ғөмүмән, делегацияның Ҡаҙағстанға барыуын ойоштороп, ҡаҙаҡтарҙың нисек эшләгәнен ҡарап, өйрәнеп ҡайтыу мөһим, тип уйлайым.

**Зөфәр Сәлихов:** Ҡаҙағстандың Википедияһын үҫтереү тураһында беҙҙәге мәғлүмәт шундай: "Беҙ, - ти ҡаҙаҡ Википедияһын ойоштороусылар, - парламентта мәсьәлә күтәргәндән һуң, Хөкүмәт ярҙам итә башланы. Иң мөһиме, был мәсьәлә менән Викибилим йәмәғәт фонды шөғөлләнә. Ҡаҙаҡ Википедияһы республика байлығы булып тора һәм сифатлы белем ресурстары булдырырға, киләсәктә авторлыҡ буйынса проблемалар тыумаһын өсөн ҡанунияҭ нормаларын көйләргә, дәүләт кимәлендә энциклопедия һәм мәғлүмәт базаһын үҫтерергә, телде ҡулланыу даирәһен киңәйтеү һәм үҫтереү өсөн унайлы шарттар тыуҙырырға кәрәк. Проект илдең имиджын нығытыу буйынса ҙур ҡеүәткә эйә. Әлеге ваҡытта Ҡаҙағстан милли энциклопедияһының һәм төбәк энциклопедияларының материалдарын урынлаштырыу эштәре тамамланды. Мәҡәләләр менән эшләргә уҡытыусылар етәкселегендә вуз студенттары йәлеп ителә. Ҡаҙағстанда Милли именлек фонды конкурс иғлан итте. Уға ярашлы, Википедияла беренсе булып ҡаҙаҡ телендә мәҡәлә урынлаштырыусы йөҙ кеше ноутбук менән бүләкләнәсәк. Беренсе дәрүәселәр билдәле лә инде".

Ә беҙ һаман проблемаларҙы хәл итә алмайбыҙ. Башҡорт Википедияһының беренсе проблемаһы - башҡорт телен белгән әүҙем ҡатнашыусыларҙың аҙ булыуы. Икенсеһе - башҡорт телендә абруйлы фәнни-ғилми яҙма сығанаҡтарҙың (фән, техника, медицина һ.б. буйынса) булмауы.

**Сәлмән Ярмуллин:** Донъя кимәлендә ҡарағанда, унда әүҙем кешеләр күп, ә башҡорт йәмғиәте әлегә ундай кимәлгә етмәгән. Шуға башҡорт Википедияһының эшмәкәрлеге үҙағышына, ирекkә генә ҡуйырға ярамай. Энтузиастар башҡарған эш шул тиклем ҙур баһаға лайыҡ, ул артабан үҫһен, тиһәк, барыбер ниндәйҙер фонд булырға тейеш.

**Илфат Ишмөхәмәтов:** Мин Милли мәғлүмәт технологиялары үҙәге булдырыу мәсьәләһен күтәрер инем. Уны нисек күҙ алдына килтерәм? Мәҫәлән, бер кеше барлыҡ башҡорт сайттарының етәкселәре менән бәйләнешкә инә. Уларҙың проблемаларын асыҡлай, мониторинг үткәрә, шрифттар ебәрә, бынан тыш, семинарҙар ойоштороп, уға сайт етәкселәрен саҡыра. Киләләр, йыйылалар, бер-береһе менән аралашалар, проблемаларын уртаға һалып һөйләшәләр. Сөнки бөгөн интернет аша бер-беребеҙ менән аралашһаҡ та, бер-беребеҙҙе белмәйбеҙ. Мәҫәлән, Бөрйән районының Ҡотан ауылында бер егет үҙенең социаль порталын эшләгән. Ҡаҙағстанда, Мәскәүҙә бар ундай егет-ҡыҙҙарыбыҙ. "Бәйләнештә" сайтында төрлө төркөмдәр бар. Баймаҡ районының Темәс ауылында Илсур Ирназаров "Ҡомартҡы" тигән бынамын сайт эшләгән. Шулай уҡ башҡортса программалар эшләүселәр бар. Үҙәктә ултырған кеше шул сайт хужаларының барыһы менән дә бәйләнештә булырға, уларҙың эшен координацияларға, сайттарҙы нисек үҫтерергә, камиллаштырырға, нисек күбәйтергә тигән бер мәсьәлә буйынса шөғөлләнергә, ниндәйҙер проблема килеп тыуҙы икән, уны бөтөн бәйләнеш буйынса таратырға, аҡсалата булмаһа ла, рухи яҡтан ярҙам күрһәтергә тейеш. Бынан тыш, башҡорт сайттары араһында конкурс үткәреү ҙә ҡамасауламаҫ ине. Кем беренсе урын ала, мәҫәлән, компьютерға эйә була, икенсе урынға - ноутбук... Шулай булһа, һәр кем сайтын яҡшыртырға, камиллаштырырға, ҡыҙыҡлыраҡ итергә, ҡулланыусыларҙы ылыҡтырырға тырышасаҡ.

**Азамат Юлдашбаев:** Төрлө министрлыҡтарҙың, Фәндәр академияһының гранттары бар, беҙ ул гранттарҙы ла юллай белмәйбеҙ. Милли интернет-ресурстар буйынса ла грант булдырырға мөмкин бит, ошо мәсьәләне лә ҡарарға индерергә кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Түңәрәк ҡорҙа ҡатнашыусылар күтәрелгән барлыҡ мәсьәләләрҙең көнүҙәк һәм кисекмәҫтән хәл ителергә тейешлеген билдәләне, резолюция ҡабул итте. Бөгөн Республика Президенты Рөстәм Хәмитов та интернет-ресурстарҙың үҫешенә ҙур иғтибар бүлә, хатта интернет-сайттарының блогерҙары менән күҙмә-күҙ ҡарап осрашыуҙар үткәрә, уларҙың фекеренә ҡолаҡ һала, бер һүҙ менән әйткәндә, мәғлүмәт быуаты менән бер ҡатарҙан атлай. Бәлки, башҡорт милли интернет йәмғиәтенең мөрәжәғәте лә уның иғтибарынан ситтә ҡалмаҫ, бәлки, йәш башҡорт блогерҙары менән осрашыуҙан да баш тартмаҫ? Ә беҙҙең йәмғиәттең менталитеты шундай: етәксе ниндәй мөнәсәбәт күрһәтә, башҡарма власть уны һис тайпылышһыҙ ҡабатлай...**

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Мөмкинлектәр сикләнмәгән

**Кеше үҙен-үҙе яһай һәм үҙен-үҙе юҡҡа сығара. Уй-фекер арсеналында ул үҙен юҡҡа сығарыу ҡоралын сукей. Һәм, киреһенсә, ул ҡыуаныс, бөйөклөк һәм тыныслыҡтың илаһи һарайын төҙөү мөмкин булған ҡорал эшләй ала. Дөрөҫ юлды һайлап һәм уй-фекерен кәрәгенсә ҡулланып, кеше камиллыҡ төпкөлдәренә етергә мөмкин. Уй-фекерен насарлыҡҡа бороп, ул хайуан кимәленән дә түбәнгә төшөүе ихтимал.**

**Джеймс Аллен.**

"Кайзен" япон теленән тәржемә иткәндә туҡтамаҫ камиллыҡ тигәнде аңлата. Тормоштоң һәр өлкәһендә лә даими һәм өҙлөкһөҙ алға барыу үҙеңдең ысын ҡеүәтеңде тормошҡа ашырыу өсөн бик мөһим. Бенджамин Франклиндан алып Махатма Гандиға тиклем, Мартин Лютер Кингтан Иван Лендлғаса, Нельсон Манделанан Тереза-әсәгә тиклем - барлыҡ билдәле кешеләр көн һайын үҙҙәренең маҡсаттарына һәм хыялдарына табан атлаған.

Һеҙ "кайзен" принцибын шулай уҡ көндәлек тормошта аҡылыгыҙҙан файҙа алыуға ла йүнәлтә алаһығыҙ. Нисектер мин шундай фекергә килдем: аҡыл - мыжыҡ әфәнде лә, яҡшы хеҙмәтсе лә. Аҡылығыҙҙы камиллаштарыу һәм уны юғары нөктәһенәсә күтәреү тураһында ҡарар ҡабул итеп, һеҙ ошо иҫәпте даими барлаһыу буласаҡһығыҙ.

Шәхси камиллыҡ банктағы иҫәп кеүек. Көн һайын үҙ-үҙегеҙҙе яҡшы яҡҡа үҙгәртеп, ваҡытығыҙҙы күнекмәләргә, уҡыуға, уйланыуға, нығлы мөнәсәбәттәр булдырыуға йүнәлтеп, һеҙ ошо иҫәпте даими тулыландырып бараһығыҙ. Бер айҙан унда кәм тигәндә 30 процент килем буласаҡ, ә бер йылдан - 365. Әммә һеҙ оҙаҡ йоҡлаһағыҙ, юҡ-бар өсөн бик йыш борсолһағыҙ, күп ашаһағыҙ һәм телевизор менән саманан тыш мауыҡһағыҙ, һеҙ шәхси уңыш иҫәбенән аҡсағыҙҙы бушҡа алып торасаҡһығыҙ.

